*"Үҙ тырышлыҡтары һөҙөмтәһендә миллионер булған 100 кешенең тормошон ентекле өйрәнеү уларҙың бер генә уртаҡ оҡшашлығы булыуын күрһәтте. Барлыҡ ошо уңыш ҡаҙаныусы ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр кешеләрҙең бары тик яҡшы яҡтарын ғына күрә белеүселәр".*

***Жак Визель.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1 - 7 МАРТ (БУРАНАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№9 (583)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙгә еңеүҙәр кәрәк,**

ысын еңеүҙәрҙе белмәгән быуын өсөн



3

**Белемгә, маҡсатҡа ынтылышты...**



асыл асылыбыҙ итәйек!

8-9

**Үҙлегеңде һаҡлау ҙа...**

мәҙәнилек



11

**Антын аҡсаға алмаштырмаһа...**

шул инде ысын табип!



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## 3 март - Халыҡ-ара яҙыусылар көнө. Ошоға бәйле, бөгөнгө заманда яҙыусыларҙың ролен нисә күреүегеҙ хаҡында фекерегеҙҙе белергә теләр инек...

***Луиза ДӘҮЛӘТШИНА, Баймаҡ белем-ара үҙәк китапхана директоры:*** Ниндәй генә заман булмаһын, яҙыусыларға зауыҡ талабы һәр ваҡыт юғары булған. Пушкин, Толстой, Горький - һәр береһе үҙ заманының рухи тәрбиәселәре бит. Уларҙың күңел һәм тел байлығына бөгөн дә һоҡланып бөтә алмайбыҙ. Бөгөнгө заман әҙәбиәтендә зауыҡһыҙлыҡтың күбәйеп барыуы, яҙыусы булырға тырышыусыларҙың бермә-бер артыуы борсой. Әҙәбиәт донъяһы сүп-сар үҫкән, ҡый баҫҡан баҡсаны хәтерләтеп ҡуя. Быға һуңғы йылдарҙа күбәйеп киткән үҙнәшер продукцияның сифаты, уны баҫып сығарыр алдынан һәр китапҡа баһалама яҙылмауы ла булышлыҡ итәлер. Талант Аллаһы Тәғәләнән бирелһә лә, яҙыусы хеҙмәте - ул энә менән соҡор ҡаҙығандай туҡтауһыҙ эҙләнеү, оло хеҙмәт, тәрән кисерештәр талап итәлер. Әхлаҡи кимәле түбән булғандарҙың юғары әхлаҡлы ижадсы булыуы бик икеләндерә. Яҙыусыларҙың үҙ-ара шәхси мөнәсәбәттәрен асыҡлау өсөн төрлө низағтарға барыуы бер ҙә генә әҙәбиәтте үҫтереүгә булышлыҡ итмәй. Республикала ижад лабораторияһы, ижадты үҫтереү мәктәптәренең юҡ хәлендә булыуы күңелдә әсе үкенеү тойғоһо тыуҙыра.

Яҙыусы, тел, киләсәк, рухиәт тигән һүҙҙәр - синоним төшөнсәләр улар. Хатта ҙур исемдәргә лайыҡ булған яҙыусыларҙың да арзан сюжетҡа ҡоролған, теле ярлы, бер ниндәй тәрбиәүи әһәмиәте булмаған әҫәрҙәре әҙәбиәттең алтын фондын байытмай. Бөгөн башҡорт әҙәбиәтендә Хәйҙәр Тапаҡов тигән тамырлы, ныҡлы имәндәй олпатланып килгән яҙыусыбыҙ булыуы, Рауил Бикбаев һымаҡ тәрән фекерле, эшсән ҡырмыҫҡалай башҡорт иләүенә йә хәҙистәр, йә поэмалар, хисле шиғырҙар, ғилми фекерҙәр, фәһемле йылъяҙмалар өйөүсе оло уҙаманыбыҙ булыуы ҡыуандыра. Һәҙиә менән Зәйнәб апайҙарҙың традицияларын дауам итеүсе Таңсулпан Ғарипова, Гөлсирә Ғиззәтуллиналарҙың булыуы өмөт уята. Халҡына ниндәйҙер һүҙ әйтер өсөн уның ни менән йәшәүен белергә кәрәк, ә бөгөнгө яҙыусылар, үпкәләштән булмаһын, халыҡ тормошон белмәй, улар араһында ҡайнамай. Шуға ла беҙ уларҙан бик урынлы саҡтарҙа ла кәрәкле һүҙ ишетә алмайбыҙ. Аҫтыртын ғына илебеҙ, телебеҙ, еребеҙ яҙмышын ҡулына алырға маташыусыларҙың һөмһөҙ ҡылыҡтарын улар өнһөҙ-тынһыҙ ғына ситтән күҙәтеп тора, ә ҡайһылары бөтөнләй бер ни белмәй дачаларында ята...

***Рафиҡ ХӘСӘНОВ, Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры актеры:*** Һуңғы ваҡытта матбуғат биттәрендә "ошо ауыр заманда" тигән һүҙҙәр йышыраҡ осрай. Шәхсән мин был төшөнсә менән килешмәйем, сөнки ауыр замандарҙың нисек булғанын барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Үткән быуат эсендә генә күпме афәттәр булған - аслыҡ-яланғаслыҡ, һуғыш... "Ҡатмарлы заман" тип әйтеүе дөрөҫөрәк булыр ине. Ошо ҡатмарлы ваҡытта, яңы заман технологиялары үҫешкән мәлдә, сәнғәтебеҙ, әҙәбиәтебеҙ бер ни тиклем ҡыҫыла бирҙе һымаҡ; рухиәтебеҙ һаҡсылары - ысын яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың, актерйырсыларыбыҙҙың бәҫе төштө кеүек. Совет осоронда был һөнәр, талант эйәләренең эшмәкәрлеге юғары баһалана ине. Барыбыҙ ҙа хәтерләйҙер, ауылға театр, яҙыусы-шағирҙарыбыҙ килһә, үҙе бер рухи байрам була торғайны. Уларҙы халыҡ шул тиклем дәрәжәләп, хөрмәтләп йөрөтә ине. Әммә заманалар үҙгәрҙе...

Әлеге ҡатмарлы заман әҙәбиәтендә бөртөклө тауар булып ҡалған яҙыусыларыбыҙ ни хәлдә һуң? Моғайын, бер аҙ албырғап ҡалғандарҙыр. Сөнки, яҙыусылар "цехы тауары" үҙ ҡулланыусыларын юғалта төштө - китап уҡыусылар һаны һирәгәйҙе, ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыусылар кәмене. Ә бит заманында беҙ донъяла иң күп китап-гәзит уҡыусылар иле булып һанала инек. Балаларҙы, йәштәрҙе китапҡа ылыҡтырыуы ауырыраҡ шул бөгөн. Был барыбер ҙә дәүләт кимәлендә ҡарала торған проблемаларҙың береһелер, тип һанайым мин. Хөкүмәтебеҙ яҙыусыларҙы, шағирҙарҙы, драматургтарҙы ваҡытында баһалап, дәртләндереп һәм дә ярҙам итеп торһа, шәп булыр ине лә бит. Әммә юҡ шул, кире тенденция күҙәтелә: Башҡортостан Яҙыусылар союзының төбәк филиалдары ябылыуын нисек аңларға? Аҡса юҡлыҡҡа һылтанып, рухиәтебеҙ тамырына балта сабыу менән бәрәбәр бит был.


**(Дауамы 2-се биттә).**


ШАҒИР ҺҮҘЕ





# САЛАУАТТЫҢ ДИҢГЕҘГӘ ӘЙТЕП ҠАЛДЫРҒАНЫ

*Зарланмайым, диңгеҙ, туламай тор.*
*Күңелдә зар сиртер ҡылдар*
*Тыуғанымдан бирле өҙөк инде...*
*Тыңла мине!*
*Үтер йылдар...*
*Берәү килер бында Уралымдан -*
*Төшмәй тормаҫ әле юлдар.*
*Килер берәү... үҙ аяғы менән,*
*Диҡҡәт менән һине тыңлар.*
*Минең рухҡа, бәлки, аят уҡыр;*
*Бәлки, ҡурайы ла сыңлар...*
*Еткер уға, зинһар, һорауымды -*
*Илкәйемә ҡайтып йырлар:*

*Иле-халҡы шыр яланғас саҡта*
*Затлыны киймәк хаҡына,*
*Иле-халҡы икмәккә зар саҡта*
*Татлыны ейемәк хаҡына,*
*Әсәләре ҡан-йәш түккән саҡта*
*Ҡатын-ҡыҙ һөймәк хаҡына*
*Көн итмәйме икән башҡорттарым?*
*Ил иркендә сәмдәре бар микән?*
*Тел күркендә ғәмдәре бар микән?*
*Башҡорт тигән йәндәре бар микән?*

*Тағы ла әйт, диңгеҙ:*
*Салауат, тиң,*
*Ялҡын ләүкетер ҡуҙ иҫәп*
*Ғүмер һөрҙө бында, ҡол булһа ла...*
*Зарыҡты ит-ҡымыҙ көҫәп,*
*Ғазапланды ҡурай-ҡумыҙ көҫәп,*
*Ыҙаланды йә ҡыҙ көҫәп...*
*Барлыҡ яҙаларҙы башҡорт өсөн*
*Күтәрергә әҙер иңем*
*Хатта теге донъяла ла, ләкин*
*һис күтәрә алмаҫ инем,*
*Әгәр башҡорт ире,*
*Килмешәккә бөгөп-бөгөп билен,*
*һатһа илен!*
*Башҡорт бисәләре,*
*Ят бауырҙан ҡоротторop түлен,*
*һатһа телен!*

*Һүҙем һыйҙы һиңә,*
*Рәхмәт, диңгеҙ!*
*Тиңһеҙ ҡөҙрәт яула, диңгеҙ!*
*Башҡортлоғон һатҡан*
*башҡорттарҙан*
*Минең хаҡты даула, диңгеҙ!*
*Түлен, телен, илен һатмағанын*
*Данла, диңгеҙ!*
*Шаула диңгеҙ!*

**(Ҡыҫҡартып алынды).**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# КИЛЕГЕҘ, ӨЙРӘТӘМ...

## сигергә лә, бәйләргә лә



**Ҡышҡы оҙон кистәрҙә уңған хужабикәләр ҡулдарына бәйләм ала, матур әйберҙәр тегә, нағышлап сигеү сигә. Үҙ ҡулың менән эшләгән әйберҙә кейеүе лә һәйбәт, бүләккә биреүе лә күңелле.**

**Оҫтабикәләргә ярҙамға хәҙер төрлө биҙәктәрҙе нисек бәйләүҙе, тегеүҙе һәм сигеүҙе тәфсирләп аңлатып яҙған, күрһәткән һүрәт-өлгөләр һәм видеояҙмалар бихисап. Тик уларҙы ҡуллана белергә генә кәрәк. Ә кем бигүк аңлап етмәй, был өлкәне һәйбәт белгән кешегә мөрәжәғәт итә ала.**

Мин нәҡ ошондай хеҙмәттәр күрһәтеп, пенсияма өҫтәмә аҡса эшләйем. Төрлө өлгөләрҙе уҡып, уларҙың айышына төшөнөргә ярҙам итәм. Тағы ла муйынды, ең төбөн, кеҫәләрҙе нисек бәйләргә кәрәк икәнлеген өйрәтәм, сөнки күптәр ҡул эшенең нәҡ ошо ерҙәрен нисек бәйләргә кәрәклеген белмәй. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙарға төҫлө бәйләүҙең серен аңлатам. Бик теләп өйрәнәләр, сөнки сағыу төҫтәр ҡулланып бәйләнгән әйбер күҙҙең яуын алып, әллә ҡайҙан үҙенә иғтибарҙы тартып тора. Шулай уҡ балалар өсөн тәғәйенләнгән кофта, юбка кеүек кейемдәрҙе лә төҫлө бәйләм ҡулланып бәйләгәндә бик күркәм була.

Минең оҫталыҡ дәрестәрендә тағы ырғаҡ ярҙамында башҡарылған брюггер һәм ирланд бәйләмдәрен өйрәнергә мөмкин. Брюггер ысулы менән бәйләнгән, нәфислек бөркөп торған салфетка, ашъяулыҡ, пәрҙәләр бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Ә ирланд бәйләме ҡулланып бәйләнгән һәр әйберҙе юғары ижад өлгөһө, тип әйтергә мөмкин. Тәү ҡарамаҡҡа ҡатмарлы һәм ауыр күренгән был бәйләмдәр, сыҙамлыҡ һәм ныҡышмалыҡ булғанда, барыһына ла "баш эйә", шуға күрә нәҡ ошо бәйләмдәрҙе өйрәтеүҙе һорап мөрәжәғәт итеүселәр бихисап. Ҡул менән, машина ярҙамында сигеү, шыма нағыш һалыу, арҡау ептәрен һурып алып, тукымаға биҙәкле селтәр һалыу (мережка), селтәрләп сигеү (ришелье) кеүек оҫталыҡ дәрестәренә лә һорау ҙур.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер көн дә эшһеҙ ултырғаным юҡ, сөнки һәр ваҡыт кемгәләр нимәләр өйрәтәм. Ярашлы рәүештә, аҡса ла килеп тора. Был эшмәкәрлегем миңә өҫтәмә килем генә килтереп ҡалмай, ә хаҡлы ялда булғандарға етмәгән аралашыу мөмкинлеге лә бирә. Шуға күрә, ҡулдары ошондай эштәрҙе белгән оҫтабикәләргә минең өлгөнө миҫал итеп алып, аҡса эшләй башларға саҡырам.**

**Земфира САФИНА.**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

# *3 март - Халыҡ-ара яҙыусылар көнө. Ошоға бәйле, бөгөнгө заманда яҙыусыларҙың ролен ниҙә күреүегеҙ хаҡында фекерегеҙҙе белергә теләр инек...*

**(Башы 1-се биттә).**

***Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА, мәғариф ветераны, Бөрйән районы:*** Беҙҙең быуын - китап уҡыусылар быуыны булды. Кем ине һуң беҙҙең өсөн яҙыусылар? Иң юғары әхлаҡ өлгөһө. Ҡыйып ҡарағыһыҙ таҙа күңел. Шундай юғары әҙәп. Керһеҙ йөрәк. Билен биштән быуып, ил хәстәре менән йәшәүсе. Ил намыҫы. Ил терәге. Алғы һыҙыҡ. Ҡәләмен штык итеп, илен, халҡын ҡурсалаусы. Ижады менән халыҡты ҡаһарманлыҡҡа әйҙәүсе. Ҡараңғы төндә яҡты нур. Тәрбиәсе. Ил ағаһы. Ил инәһе. Ул тиклем күп тә түгел ине улар. Һәҙиә Дәүләтшина, Дауыт Юлтый, Зәйнәп Биишева, Фәрит Иҫәнғолов, Мостай Кәрим, Әнүәр Бикчәнтәев, Яныбай Хамматов, Ноғман Мусин... Һәр береһе беҙҙең өсөн гәрәбә булды...

Нинә бөгөн күңелдә шундай ҡырғын, көрсөк? Китаптар кәштә тулы, әммә уҡылмай. Әҙәбиәт, ниндәйҙер арауыҡта йәнһеҙ, рухһыҙ, осоҙ "мөхәббәт"кә ҡоролған, зауыҡһыҙ әҫәрҙәр менән сүпләнеп киткән ялан һымаҡ. Яҙыусы - ул һөнәр тигәндә аңлаталыр, ә әҙип булыу - ул Хоҙай бирмеше, хикмәттер, тип уйға ҡалып торғаным да булды. Әммә уйға һалыр, йөрәккә үтер, күңел эсен байҡар әҫәрҙәр ҙә юҡ түгел.

**Тик илдең боролошло мәлдәрендә, ер, тел, мәғариф, мәктәп, конституция яҙмышы хәл ителгәндә ниңә баштары ла күренмәй һуң ул ижад кешеләренең? Элек телевидение юҡ ине, яҙыусылар менән осрашыуҙар бик һирәк кенә булды. Һыуһаған йәнгә тереһыу һымаҡ ҡына. Ләкин уларҙы ишетә, йыраҡ аралар аша ла күрә, йөрәк тибештәрен тоя инек бит.**

Милләтебеҙ, тип күкрәк киреп, төрлө трибуналарҙан хәбәр йөрөтәбеҙ, телевидение-радиола әллә күпме тапшырыуҙар, гәзит биттәрендә бөтмәҫ мәҡәлә-яҙмалар, йыйындар, ҡорҙар, тағы әллә күпме осрашыу-конференция-фәләндәр... Тик быларҙың барыһы ла буш һүҙҙәр һөйләү урынына әйләнә лә ҡуя.

Эйе, яҙыусылар хәҙер быуа быуырлыҡ... Тик һүҙҙәренең бәҫе генә бөттө. Мәшһүр Аҡмулла әйтмешләй "Һүҙең булғас, эшең дә булһын..." Ә былай... Белорус яҙыусыһы Максим Танк әйтмешләй, "Халыҡ барыһын да кисерә ала. Тик яҙмышы хәл ителгәндә яҙыусыларҙың шымып ҡалыуын ғына кисерә алмай..." Үҙебеҙҙең яҙыусыбыҙ Урал Мостафиндың һүҙҙәрен килтереү ҙә урынлы булыр бында: "Әҙәбиәт - һүҙһеҙ, мәғрифәт - телһеҙ, сәнғәт - йөҙһөҙ, йәмғиәт өнһөҙ булған һайын, рухиәт төҫһөҙләнә, тормош битһеҙләнә, холоҡ-ҡылыҡтар көндән-көн йәмһеҙләнә барыуы һәр намыҫлы башҡортто уйландырырға тейештер ул..."

***Миңһылыу АБДУЛЛИНА, Өфө ҡалаһы Дим районы мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Кешенең рухи камиллашыуында яҙыусы, шағир, сәсән һүҙҙәренең әһәмиәте әйтеп бөтөргөһөҙ баһаға эйә булыуын һәр кем белә. Заманында шағир һәм яугир Салауат Юлаевтың ялҡынлы һүҙе азатлыҡ өсөн көрәшкә әйҙәгән. Киҫкен синфи көрәш йылдарында иһә милли уяныу көтәреү өсөн Шәйехзада Бабич, Мәжит Ғафури шиғриәте һулар һауалай кәрәк булған. Бөгөнгө көндә лә башҡорт әҙәбиәтендә лайыҡлы һүҙ өлгөләре бар, әлбиттә. Тап улар яҙмышыбыҙға яҙған ҡатмарлы боролоштарҙы йайлағанда, тойғо-кисерештәребеҙ ҡайнап торғанда йә иһә йоҡлайһүнеп ятҡанда дөрөҫ юл һайларға ярҙам итә. Бөгөнгө әҙәбиәтебеҙ өлгөләренең гәзит-журналдарҙа баҫылған ҡайһы берҙәрен генә уҡып барғанда ғына ла бик күп әхлаҡи ҡиммәттәргә юлығабыҙ. Ғөмүмән, Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев, Рәшит Назаров кеүек шағирҙарыбыҙ әҫәрҙәре менән өҫтәл китабыма әйләнде. Ғайса Хөсәйенов, Роберт Байымов, Ғәлим Хисамов, Аҫылғужа Баһумановтарҙың бороңғо тамырҙарыбыҙҙы юллаған әҫәрҙәре тарихыбыҙҙы һәр саҡ хәтерҙә тоторға, уның менән ғорурланырға ярҙам итә. Ноғман Мусин әҫәрҙәрен яратып уҡыйым. Зәйнәп Биишева менән Таңсулпан Ғарипованың ижад өлгөләре башҡорт ҡатын-ҡыҙы яҙмышының энциклопедияһына тиң, тип әйтер инем. Ғүмере буйы тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы булып эшләгән Лира Яҡшыбаева әҙәбиәтебеҙҙә яңы тема, яңы һүҙ әйтеүе менән билдәлелек яуланы.

Тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы булараҡ, мин яҙыусыларыбыҙҙың премия, ҡәнәфи һәм тағы ла нимәләрҙер бүлешеү ығы-зығыһынан арынып, телебеҙ һағында уяулыҡ тороуҙарын, мәктәптәр менән әүҙемерәк хеҙмәттәшлек итеүҙәрен, балаларҙы ҡыҙыҡһындырырҙай заманса әҫәрҙәр ижад итеүҙәрен теләр инем. Шулай ҙа булмаһа, киләсәктә уларҙың әҫәрҙәрен кем уҡыр һуң? Тылсымлы тағы менән донъяны ҡотҡарыусы тағы бер Гарри Поттер килеп сығып, беҙҙең балаларҙың идеалына әүерелә күрмәһен тағы...

КЕМ АЛЫҠ?

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**1 февралдән 31 мартҡа тиклем тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән, йәғни 384 һум 36 тингә, 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн яҙыла башлай алаһығыҙ.**

Былтыр 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн баҫмабыҙға яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр ай һайын беҙҙең бүләктәребеҙгә - ҡыҙыҡлы китаптарға лайыҡ булды. Был дәртләндереү сараһын әле лә дауам итәбеҙ. Февралдә 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән **2 уҡыусыбыҙ - "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", 2 уҡыусыбыҙ - "История башкирского народа" китаптарын алып ҡыуаныр**. Ындай бүләкләүҙәр мартта яҙылғандар өсөн дә буласаҡ.

Ә инде эргә-тирәгеҙҙә "Киске Өфө"гә быйылғы йылдың тәүге яртыһына яҙылырға оноҡҡан, өлгөрмәгән кешеләр булһа, уларға ошо һүҙҙәребеҙҙе тапшырығыҙ: гәзитебеҙгә 17 мартҡа тиклем яҙылғандар уны апрелдән алдыра башлаясаҡ.

**Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: "Киске Өфө" гәзитенә республиканың һәр районында, ҡалаһында, ауылында яҙылып була.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мәктәпте тамамлаусыларҙы алтын һәм көмөш миҙалдар менән наградлау тураһында положение федераль кимәлдә туктатылды. Беҙҙең республикала уны йыл һайын 2,5 меңдән ашыу сығарылыш уҡыусыһы ала ине. Республика Президенты Рөстәм Хәмитов был традицияны дауам итергә кәрәк, тип иҫәпләй һәм БР Мәғариф министрлығына бөтә кәрәкле документтарҙы әҙерләргә һәм уҡыу йылы аҙағына тиклем миҙал эшләүҙе тәьмин итергә йөкмәтте.

✓2013 йылда Башҡортостандың консолидацияланған бюджетының дөйөм сығым күләменән социаль мохтажлыҡҡа сығымдар 73 процент тәшкил итте. Хәтһеҙ ҙур бюджет дефицитина ҡарамаҫтан, социаль мохтажлыҡҡа сығымдар ҡыҫҡартылмаясаҡ, тип белдерҙе Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов. БР Финанстар министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, республиканың консолидацияланған бюджет табышы 154 миллиард һум тәшкил итә, сығым - 171,5 миллиард. Шулай итеп, дефицит 17,5 миллиард һум тәшкил итте.

✓2014 йылдың 26 февралендә "Сочи-2014" Паралимпия уты эстафетаһы старт алды. Ул Рәсәй Федерацияһының бөтә һиғеҙ федераль округы аша үтәсәк һәм 45 ҡалаға буласаҡ. Эстафетаның бишенсе көнөндә - 3 мартта ут Башҡортостандың баш ҡалаһы урамдары буйлап үтәсәк. Өфөлә был ваҡиғала иллеләп факел йөрөтөүсе ҡатнашасаҡ. Өфөлә ут башҡорт ырыуҙары тураһында риүәйәтте башҡарыу ваҡытында ҡабыҙыласаҡ. Эстафетаның ҡала этабы Салауат Юлаев исемендәге майҙанда тамамланасаҡ. 14 сәғәттә бында байрам уҙасаҡ. Эстафетаның оҙонлоғо 5 километр самаһы тәшкил итәсәк һәм ул ҡаланың тарихи урындары буйлап үтәсәк.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең Указы менән Республика территориаль үҫеш буйынса агентлыҡтың эшмәкәрлеген туҡтатты. Ведомствоның функциялары БР Иҡтисади үҫеш министрлығына тапшырылды.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһының спорт министры Андрей Иванотаға Өфөлә шорт-трек өсөн боҙ аренаһы төҙөлөшөн яҡындағы ике йылда тамамларға ҡушты. Үҙәк төҙөлөшө "Төҙөүсе" стадионы эргәһендә Өфөнөң төньяҡ өлөшөндә 2013 йылда башланған. Ул боҙ һарайы менән 1500 тамашасы өсөн трибунанан тора. Объект хаҡы 480 миллион һум. Боҙ һарайының төҙөлөшө федераль һәм республика бюджеттарынан, шулай уҡ бюджеттыҡы булмаған сығанаҡтарҙан финанслана.

КӨНАУАЗ

# БЕҘГӘ ЕҢЕҮҘӘР КӘРӘК,

## ысын еңеүҙәрҙе белмәгән быуын өсөн

**Ниһайәт, ҙур өмөттәр бағлап көтөп алынған Олимпиада уйындары тамамланды. Рәсәй командаһы 13 алтын миҙал менән беренсе урын яулап, ил етәкселәрендә, халыҡта спортыбыҙ өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уятты, шикелле. Был - рекорд, быға тиклем беҙҙең дәүләт спортсыларының бындай уңышҡа өлгәшкәне юҡ ине. Ысынлап та, субтропик бүлкәттә быға тиклем булмаған ҡышҡы спорт ярышын үткәреү өсөн Рәсәй күп көс һалды. Олимпиада объекттарын төҙөү өсөн йәмғеһе 1,536 триллион һум аҡса тотонолдо.**




Кемгә нисектер, минең өсөн әлеге Олимпиада ярыштары элекке һымаҡ уҡ ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырманы. Ишетеп белеүемсә, был фекерҙә мин яңғыҙ түгелмен. Үҙебеҙҙең спортсыларҙың еңеүе өсөн советтар осорондағы һымаҡ рухи күтәренкелек юҡ кимәлендә хәҙер. Беренсенән, Валерий Харламов, Борис Михайлов, Ирина Роднина, Раиса Сметанина һымаҡ бөйөк спортсылар ҡатнашҡан традицион хоккей, саңғы, биатлон ярыштары урынына күптәр өсөн сәйер булған, әллә ни аңлашылып бөтмәгән, әммә "миҙаллы" керлинг, фристайл, шорт-трек, скелетон кеүек спорт төрҙәренең баҫып килеүен беҙҙең быуын көйәрмәндәре ҡабул итә алмай. Икенсенән, Украинала барған бола ла иғтибарҙы Олимпиаданан ситкә йүнәлтте, быны хатта Көнбайыш тарафынан махсус ойошторолған сара, тип ҡабул итеүселәр ҙә етерлек.

Яуланған миҙалдарҙың байтағы юғарыла әйтеп үтелгән яңы спорт төрҙәре буйынса булды. Рәсәй гражданлығы алған легионерҙар ҙа был еңеүҙәргә тос өлөшөн индерҙе. Иң үкенеслеһе -саңғы, биатлон буйынса Рәсәй спортының үҙ позицияһын юғалтыуы. Тик һуңғы көндәрҙә генә саңғы марафоны һәм биатлон эстафетаһында ир-егеттәр еңеү яуланы. Ҡатын-ҡыҙҙар иһә, ғүмерҙә булмаған хәл, бер миҙалһыҙ тороп ҡалдылар. Ярай, фигуристар оятҡа ҡалдырманы әле.

Хоккей тураһында айырым әйтеп үтмәйенсә булмай. Был беҙҙең ил өсөн иң мөһим ҡышҡы спорт төрө. Бында беҙ миҙалһыҙ тороп ҡалдыҡ. Биш уйында ни бары 13 шайба индерҙек. Шуларҙың бишәүһе Словения командаһына тура килде. Дүрт йыл буйына махсус рәүештә үҙебеҙҙә үткән олимпиадаға әҙерләнеп, команда составына донъяның иң көслө хоккейсыларын йыйып, тренер Зиннәтулла Биләлетдиновҡа бөтә шарттар тыуҙырып, илебеҙҙә иң популяр ҡышҡы спорт төрөндә бөтә донъя алдында рисуай ҡалдыҡ. 12 команда араһында тик 8-се урын ғына алдыҡ. Бының төп сәбәбе, моғайын, тренерҙың иң көслө хоккейсыларҙан берҙәм команда төҙөй алмауында булғандыр. Бында Рәсәй Хоккей федерацияһы чиновниктарының артыҡ киң күңеллелеге лә роль уйнағандыр. Рәсәй - АҠШ матчына американ арбитрын тәғәйенләү үҙе генә ни тора! 28 судьяның 17-һе НХЛ-дан һайланыуы ла дөрөҫ булманы. З.Биләлетдинов ғәйепте үҙенә алды алыуға, әммә тренерлыҡтан киткеһе килмәне. Владислав Третьяктың да Хоккей федерацияһы президенты посын ташлап китеүе икеле. Тиҙҙән Белоруста үтәсәк донъя чемпионатында хатаны төҙәтербеҙ, тип вәғәҙә итһәләр ҙә, хатта ундағы алтын миҙал да көйәрмәндәрҙә тейешле ҡәнәғәтләнеү хисе тыуҙырмаҫ. Ул миҙалды олимпиада миҙалы менән сағыштырып булмай бит инде. Көслө хоккейсылар төрлө һылтау табып, был чемпионатта ҡатнашмаясаҡ та.

Сочиҙағы олимпиада донъялағы көсөргәнешле ваҡытҡа тура килде. Уйындар башланмаҫ элек Ҡара диңгеҙгә АҠШ хәрби караптарынан торған эскадра килеп инде. Юҡҡа булмаған икән. Украиналағы революция тип аталған сыуалыштың олимпиада менән тап килеүе алдан планлаштырылған акцияға оҡшаған булып сыҡты. Ул ғына ла түгел, ҡайһы саҡта Украинала Олимпиаданың бер ярышы барған һымаҡ тойолдо, тик бындағы "уйында" көйәрмәндәр төп ролде атҡарҙы. Көнбайыш дәүләттәре Евросоюз менән килешеү төҙөүҙән баш тартҡан Виктор Януковичты яңы бандерасылар ҡулы менән президентлыҡтан алып ташланы. Ярай, украин халҡы үҙ проблемаларын нисектер үҙе хәл итер. Мине ошо ике ваҡиғаның бер ваҡытҡа тура килеүе улар араһындағы ҡайһы бер параллелдәр тураһында уйланырға мәжбүр итте. Олимпиаданың спорт бәйгеһе булғанын аңлатыу кәрәкмәҫ. Ә бына Украиналағы ҡыялҡының да үҙенә күрә ярыш икәненә әҙерәк туҡталып үтергә кәрәктер.

Йыл аҙағында Украинаның Евросоюзға инеүҙән баш тартыуын Рәсәйҙең, башлыса, Владимир Путиндың, еңеүе тип ҡабул иткәйнек. Ысынлап та, Рәсәй туғандаш дәүләткә ярҙам итеү маҡсатында 15 миллиард доллар аҡса бүлде, газға хаҡты төшөрҙө. Әммә ярыш (алыш) бының менән генә тамамланманы. Көнбайыш дәүләттәре украин халҡының бер өлөшөн һөсләтеп, шул иҫәптән Олимпиаданан иғтибарҙы кәметеү маҡсатында, параллель "шоу" ойошторҙо. Бының махсус рәүештә ойошторолған шоу икәненә ышаныу өсөн телевидениенан күрһәтелгән бер нисә кадрҙы ғына атап үтеү ҙә етә: бер милиционерҙың күҙен соҡоп сығарыу, Януковичтың резиденцияһын күрһәтеү ябай кешелә тейешле тойғолар тыуҙырыу өсөн атҡарылды ла инде. Олимпиадала ярыш алдан билдәләнгән рәсми ҡағиҙәләр буйынса барһа, Украиналағы "сәйәси ярыш" ябай кешегә аңлашылмаған ҡанундар буйынса үткәрелә. Рәсәйҙең Олимпиадала еңеүенә компенсация булып уның Украинала еңелеүе булыр, тип иҫәплләгәндәр ҙә етерлек.

Олимпиада тамамланды. Спортта көслө мотлаҡ һәм ғәҙел еңә. Унда мутлашыу юҡ кимәлендә. Ярыш барышын меңәрләгән һәм миллионлаған көйәрмән күҙәтеп тора. Йәмғиәт күҙлегенән спорттың кәрәклеген һис тә аңлатып булмай. Кешелек өсөн сана-саңғыларҙа, коньки-бобтарҙа шыуған спортсылар бер ниндәй файҙа килтермәгән кеүек. Әммә бөтә талантын, көсөн һалып еңеү яулаған спортсы йәмғиәт өсөн рухи күтәренкелек, яңы өмөттәр тыуҙыра. Нисек кенә булмаһын, Олимпиаданан телерепортаждар беҙҙең хәтерҙә еңеү бәхетенән шатлыҡҡа тулған йөҙҙәр, күҙ йәштәре галереяһы булып һаҡланасаҡ (Мәҙәниәт өлкәһендәге еңеүҙәрҙең дә ошолай ғәҙел булыуын теләге ҡала). Был спорт байрамын ойошторған Владимир Владимирович Путинға Рәсәй халҡының мең рәхмәте яуһын! Беҙгә хәҙер еңеү бик кәрәк. 1945 йылдағы Бөйөк Еңеү тантанаһын кисергән шаһиттар бөтөп бара, 1961 йылдағы Юрий Гагарин менән бәйле еңеү ҙә онотолоп бара. Бөтә донъяны шаҡ ҡатырған еңеүҙәрҙе күрмәгән, белмәгән йәш һәм урта быуын кешеләре өсөн был ысын мәғәнәһендә тарихи ваҡиға.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Беҙгә быйылғы 2014 йылдың Мәҙәниәт йылы икәнен дә онотторға ярамай. Спортҡа ҡарағанда, мәҙәниәт йәмғиәт өсөн күпкә файҙалыраҡ булыуына ҡарамаҫтан, дәүләт тарафынан уға тейешле иғтибар бүленмәй. Дәүләт бюджетындағы сығымдарҙан мәҙәниәт һәм сәнғәт тармаҡтарына бүленгән аҡса 1 проценттан да артмай, уныһы ла йылдан-йыл кәмей бара. Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре олимпиада кеүек байрамдар тураһында тик хыяллана ала. Евровидениены был иҫәпкә индерергә кәрәкмәйҙер. Олимпиада призерҙарының еңеү өсөн алған суммалары - уларҙың ике ятып бер төшөнә инмәй.**

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Интернет селтәрендә "Башҡорт теленең терминологик базаһы" барлыҡҡа килде. Уның ойоштороусылары - Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Лингвистика һәм мәғлүмәти технологиялар лабораторияһы. Сайттың базаһында астрономия, биология, туризм, хәрби эш, география, информатика, сәнғәт, мәҙәниәт, математика, әҙәбиәт ғилеме, медицина, тел ғилеме һәм башҡа белем өлкәләре терминдары тупланған. Базаны русса-башҡортса һүҙлек кеүек ҡулланып була. Ҡулланыусылар фекере буйынса, сайт тәржемәселәр, телселәр, тел ғилеме өлкәһендәге белгестәре, башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныусылар һәм уны өйрәнеүселәр өсөн файҙалы буласаҡ.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Октябрьский ҡалаһында "Физик культура һәм күмәк спорт үҫеше" темаһына муниципаль район һәм ҡала округы хакимиәттәре башлыҡтары ҡатнашлығында семинар-кәңәшмә үткәрҙе. Рөстәм Зәки улы Башҡортостан спортсыларының, шорт-трексылар Семен Елистратов һәм Руслан Захаровтың, ҡаҙаныштарын юғары баһаланы, ике көмөш миҙал яулаусы, республикабыҙҙа тыуған Ольга Вилухинаның уңыштарын да телгә алып үтте. Билдәләнеүенсә, республикабыҙҙа 100-ҙән ашыу спорт төрө, инвалидтар өсөн 20-нән күберәк спорт төрө үҫешә. Спорт ҡоролмалары иҫәбе буйынса Волга буйы федераль округында беренсе урынды биләйбеҙ, улар беҙҙә 11 мең.

✓Республика Хөкүмәтендә "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләүҙең 109-сы тантанаһы булып уҙҙы. БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова, республиканың төрлө райондарынан йыйылған әсәләргә республика Президенты Рөстәм Хәмитовтың ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе һәм 58 әсәгә наградалар, аҡсалата премиялар тапшырҙы. Лилиә Салауат ҡыҙы билдәләүенсә, республикабыҙҙа күп балалы ғаиләләрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса бик яҡшы программа эшләп килә. Ул ғәмәлгә ашырылған йылдарҙа 170 ғаилә сертификаттар алды, уларҙың уртаса суммаһы 2 миллион 600 мең һум тәшкил итә. Тағы ла меңдән ашыу ғаилә үҙ сиратын көтә.

**“Башинформ”дан.**

✓ *Ошо миҫалды Стәрлетамаҡ өлгөһөндә күрһәтергә мөмкин: Гөлшат Әхмәтова тигән уҡытыусыбыҙ республика конкурсында еңеп, беренсе урын алғас, ҡайтып төшөүенә Спартак Әхмәтов уны фатир асҡысы әҙерләп көтөп торҙо.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ЙҮНӘЛЕШ БИЛДӘЛЕ...

## эшләргә кәрәк

**Баш ҡала округы хакимиәте өсөн мәғариф системаһын үҫтереү социаль-иҡтисади сәйәсәттең өҫтөнлөклө йүнәлеше булып тора. Был хаҡта матбуғат конференцияһында ҡала мэры урынбаҫары Сынтимер Баязитов белдерҙе.**

Былтыр ҡала мәғарифы өлкәһенә 7 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленгән (был ҡаланың консолидацияланған бюджетының 32 проценты самаһын тәшкил итә). Дөйөм белем биреүҙең төбәк системаһын модернизациялау буйынса саралар комплексын тормошҡа ашырыу өсөн һуңғы өс йылда 570 миллион һум тотонолған. Улар мәктәптәргә спорт ҡорамалдары һәм ҡоролмалары, ашханалар, медицина кабинеттары, уҡытыу-лаборатор эштәрҙе башҡарыу өсөн йыһаздар алыуға, мәктәптәрҙең китапхана фондын тулыландырыуға йүнәлтелгән. Капиталь ремонт иһә 120 мәктәптә үткәрелгән.

Мәктәпкәсә белем биреү системаһы хеҙмәте менән һәр ғаилә файҙалана алһын өсөн дә шарттар тыуҙырыла. Былтыр ғына баш ҡалала 29 шәхси балалар баҡсаһы асылған. Йәш ярымдан өс йәшкә тиклемге сабыйҙарҙың 50 проценты самаһы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһында йөрөһә, өс йәштән ете йәшкә тиклемгеләр 90 проценттан күберәкте тәшкил итә. 2014 йылдың 1 сентябренән мәктәпкәсә белем биреү системаһының төп бурысы булып федераль дәүләт белем биреү стандарттарын индереү тора. Әлеге ваҡытта пилот проекты булараҡ баш ҡалала 4 балалар баҡсаһы ошо йүнәлештә эшләй. 2016 йылдың 1 ғинуарына барлыҡ мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары ла ошо системаға күсеп бөтөргә тейеш.

Сәләмәтлектәрендә ниндәйҙер тайпылыштар булған балаларҙы тиҫтерҙәре менән бергә уҡытыу буйынса 15 мәктәптә эшмәкәрлек алып барыла.

- Тәрбиә эшендә рухи-әхлаҡи һәм гражданлыҡ-патриотик тәрбиә мөһим урында тора, - ти Сынтимер Биктимер улы, 76 мәктәптә музейҙар, Хәрби Дан музейы филиалдары булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып. Был йәһәттән өҫтәмә белем биреү учреждениеларының әһәмиәте бик ҙур. Уларҙа балаларҙың ижади ҡеүәтен үҫтереү, һәләтен асыу өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырылған. Быны төрлө халыҡ-ара, Рәсәй, республика кимәлендә яулаған ҡаҙаныштар ҙа раҫлай.

Ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары шулай уҡ 2014 йылға мәғариф системаһының өҫтөнлөклө эш йүнәлештәрен дә атап үтте. Улар араһында төп урында белем биреү хеҙмәтенең барлыҡ категория балалар файҙаланырлыҡ булыуы, белем биреү сифатының юғарылығы, мәғлүмәт-мәғариф мөхитенең берҙәм системаһын булдырыу, смарт-белем биреү проекттарын индереү тора.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

АФАРИН!

**"Боронғо фәйләсуфтар: "Әгәр дәүләттә оҫта тегенсе юҡ икән, халыҡ нимә етте, шуны кейәсәк; әгәр дәүләттә оҫта икмәк бешереүсе юҡ икән, халыҡ бер ваҡытта ла хуш еҫле икмәк тәмен белмәйәсәк; әгәр дәүләттә яҡшы уҡытыусылар юҡ икән, ул дәүләттең йәшәүгә һәләте булмаясаҡ", - тигән. Ысынлап та, бөтөн нәмә уҡытыусынан башлана. Унһыҙ шағирҙар ҙа, аҡыл эйәләре лә, Шекспирҙар ҙа, Коперниктар ҙа тыумаҫ, ҡитғалар, яңы юлдар, яңы мөмкинлектәр асылмаҫ ине. Бөгөн уҡытыусы - ул ябай уҡытыусы ғына түгел. Тәү сиратта, үҙенең булмышы, асылы, үҙ-үҙен тотошо менән һабаҡ биреүсе ул. Тимәк, беҙ бөгөн аҡыл мөмкинлектәренең, мәҙәниәттең, әхлаҡтың, кеше менән аралашыу һәләтенең иң бейек түбәһендә булырға тейешбеҙ. Уҡытыусы һөнәренең иң бәхетле һөнәрҙәрҙең береһе икәнлеген beләһегеҙме? Сөнки беҙ көн һайын күп тапҡырҙар бәхеткә төрөнәбеҙ. Уҡыусың ниндәйҙер ижади эш эшләне икән - беҙ бәхетле, кисә сисә алмаған мәсьәләне бөгөн хәл итте икән - беҙ бәхетле. Шым ғына килеп, күҙҙәреңә өмөт менән бағып кәңәш һорай икән - беҙ бәхетле. Әгәр уҡытыусы йәшәй икән - тормош дауам итәсәк!" - "Баш ҡала уҡытыусыһы - 2014" конкурсының сираттағы еңеүсеһе Гүзәл Леонованың һүҙҙәре был.**

# ТОРМОШ ДАУАМ ИТЕР...



## уҡытыусы барҙа!

25 февралдә Ҡала мәҙәниәт йортонда баш ҡалала һәләтле педагогтарҙы асыҡлау, уҡытыусыларҙың һөнәри аралашыу даирәһен киңәйтеү һәм үҫтереү, мәғариф өлкәһендәге өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙе пропагандалау, уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәреү маҡсатында уҙғарылған мөғәллимдәр ярышына тантаналы рәүештә нөктә ҡуйылды. Унда быйыл төрлө предметтан (башланғыс синыфтар, рус теле һәм әҙәбиәте, татар теле һәм әҙәбиәте, музыка, тарих, йәмғиәтте өйрәнеү, инглиз теле, география, химия, математика, информатика һәм физик культура) белем биреүсе 49 уҡытыусы ҡатнашты. Шуларҙың 13-ө иң яҡшы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы исеме өсөн көрәште. 21 ғинуарҙан 7 февралгә тиклем өс этапта дауам иткән конкурстарҙа педагогтар авторлыҡ эштәрен күрһәтте, асыҡ дәрестәр уҙғарҙы, түңәрәк ҡорҙарҙа, бәхәстәрҙә үҙ фекерен ярып һалды. Быйыл конкурстың яңылығы булып "Уҡыусылар менән әңгәмә", "Ата-әсәләр менән әңгәмә" һынауҙары торҙо.

Шулай итеп, "Баш ҡаланың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - 2014" конкурсында Калинин районының 112-се мәктәбенән Гүзәл Ҡаһирова еңеүсе булды. "Баш ҡаланың йыл уҡытыусыһы" конкурсының "Иң яҡшы татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" номинацияһында уңыш Киров районының 21-се лицейы уҡытыусыһы Эльвира Ғилфановаға йылмайҙы. "Иң яҡшы рус теле уҡытыусыһы" номинацияһында һәм абсолют еңеүсе тип Орджоникидзе районының "Содружество" лицейы уҡытыусыһы Гүзәл Леонова иғлан ителде һәм уға коллегаларының көслө алҡыштарына ҡушып, автомобиль асҡысы тапшырылды. Шулай уҡ тантаналы сарала "Педагог-тикшеренеүсе", "Тәрбиәсе-тикшеренеүсе", "Уҡытыусы-мастер", "Педагог-мастер", "Тәрбиәсе-мастер" исемдәрен алыусылар ҙа тәбрикләнде.

**Гүзәл ҠАҺИРОВА, "Баш ҡала башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - 2014" конкурсы еңеүсеһе:** Конкурстың бер этабында шундай һорау бар ине: "Әгәр китап булһам, ниндәй китап булырға теләр инем?" Был һорауҙы, әҫәрҙәге ниндәй образ булырға теләр инем, тип саҡ ҡына үҙгәртер инем. Үҙемә килгәндә, Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәрендәге ап-аҡ ҡарҙы уйып ингән утлы күмер булырға теләр инем. Сөнки һөнәрем буйынса баланың аҡ ҡарҙай, аҡ ҡағыҙҙай ап-аҡ күңеленә утлы күмер кеүек уйылып инеп, башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләйем, уларҙы уйланырға мәжбүр итәм. Әлеге конкурста ҡатнашыу ошо йүнәлештәге эшемдә оло бер этәргес, тәжрибә майҙансығы булды. Аҡыл бүлешкәндән арта ғына, тигән кеүек, коллегаларымдың эш алымдарын ҡарау, улар менән фекер алышыу, тәжрибә уртаҡлашыу, һәр бер мөғәллимдән ниндәйҙер һабаҡ алыу артабан да эшмәкәрлегемде камиллаштырырға ярҙам итеренә инанам.

Ниндәй генә предметтан уҡытмаһын, уҡытыусы ҡулында көслө ҡорал бар - ул уҡыусыларҙың белеменә баһа ҡуйыу. Баһа менән уҡыусы күңелен үҫтерергә лә, уның тап һинең предметыңды өйрәнеү теләген һүндерергә лә мөмкин. Шуға күрә, уҡытыусы, белем биреү менән бер рәттән, уҡыусыларҙа үҙбаһа, үҙ-үҙҙәренә ышаныс тәрбиәләргә тейеш, тип уйлайым һәм ошо йүнәлештә эшләйем. Үҙ-үҙенә ышанған, көслө рухлы уҡыусылар ғына был тормошта һәр саҡ үҙ юлын табасаҡ, маҡсатына өлгәшәсәк һәм уҡытыусының эш һөҙөмтәһе лә тап шунда күренәсәк.

**Фәнзил САНЪЯРОВ, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең йыл уҡытыусыһы, "Баш ҡала башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - 2014" конкурсының баһалама ағзаһы:** Рәсәйҙә, республикала һөнәри конкурстар бик йыш булып тора. Әйтергә кәрәк, уларҙа ҡатнашыу, беренсе сиратта, уҡытыусының үҙ-үҙен еңеүе ул. Сөнки кеше үҙ йортонан, үҙ мәктәбенән, үҙ орбитаһынан сыға икән, ул үҙен еңеп сыға. Беҙҙең әүҙем, үҙ эшен күрһәтә белгән, ниндәйҙер һөҙөмтәләргә өлгәшкән уҡытыусыларыбыҙ бар һәм улар бик күп. Икенсе яҡтан, был конкурстар етәкселектең уҡытыусыларға булған мөнәсәбәтенең асыҡ сағылышы ла булып тора. Мәҫәлән, мин 1993 йылғы республика конкурсында еңеп ҡайтып, дүшәмбе көн эшкә сыҡһам, сәғәт туғыҙға район хакимиәте башлығы Раил Әбдрәшитовҡа саҡырталар. Киткән саҡта көсләшеп сығып киткәйнем, шуға әҙерәк күңел шөбһәләнеп китте. Әрләргә саҡыралар икән, тиһәм, хакимиәт хеҙмәткәрҙәрен йыйып, ҡулыма район хакимиәте башлығының Маҡтау ҡағыҙын тапшырып, сираттан тыш бер ай отпуск биреп, ялға ебәрҙеләр. Бер ай буйы республика мәктәптәре буйлап, ошо конкурсты пропагандалап йөрөнөм. Бында район хакимиәте башлығының ошо конкурстың ни тиклем мөһимлеген аңлап, етәкселек, мәғариф бүлеге алдында уҡытыусыны күтәреүе тора. Быны мин бер ваҡытта ла онотмайым һәм һәр ваҡыт рәхмәтлемен.

Ошо миҫалды Стәрлетамаҡ өлгөһөндә күрһәтергә мөмкин: Гөлшат Әхмәтова тигән уҡытыусыбыҙ республика конкурсында еңеп, беренсе урын алғас, ҡайтып төшөүенә Спартак Әхмәтов уны фатир асҡысы әҙерләп көтөп торҙо. Быны нимә ул конкурс, Хөкүмәт хәстәрлеге, аныҡ етәксенең ошо аныҡ уҡытыусыға булған мөнәсәбәте. Шуға күрә, баш ҡалабыҙ ҙа, республикабыҙ ҙа уҡытыусыларҙы артабан да күтәрер, ҙурлар һәм был эш оҙаҡ йылдар дауам итер, тигән өмөттәмен.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Республиканың Милли халыҡ ҡоралдары оркестрының художество етәксеһе Рәмил Ғәйзуллин Истанбулда халыҡ-ара симпозиумда ҡатнашты. Унда Рәсәйҙән, АҠШ-тан, Болгариянан, Әзербайжандан, Үзбәкстандан, Балҡан ярымутрауы илдәренән һәм Төркиәнән башҡарыусылар, музыка белгестәре һәм фольклорсылар ҡатнашты. Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмил Ғәйзуллин форумда башҡорт халҡының тынлы музыка ҡоралдары тураһында доклад менән сығыш яһаны һәм милли ҡоралды эшләү буйынса оҫталыҡ класы үткәрҙе. Артист быға оҡшаш сараны, халыҡ-ара "Ҡурай-симпозиумы" кеүекте, Башҡортостанда ла ойоштororға кәрәк, тип иҫәпләй һәм ошо тәҡдимде республика етәкселегенә еткермәксе.

✓Силәбе өлкәһенең Үрге Өфәлей ҡалаһында беренсе тапҡыр Башҡортостан мәҙәниәте көнө уҙҙы. Байрам ҡаланың крайҙы өйрәнеү музейында башланды, унда "Шәжәрә байрамы" үтте. Төрлө йәштәге дүрт ҡатнашыусы шәжәрә ағасын күрһәтте һәм ғаиләһенең тамырҙары тураһында һөйләне. Байрамды ойоштороусы - ҡаланың билдәле йәмәғәт эшмәкәре, "Тамсылар", "Тамыр", "Ләйсән" башҡорт коллективтары етәксеһе, Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайының Үрге Өфәлей бүлексәһе рәйесе Фәнүзә Зарипова. Байрамда Өфөнән, Екатеринбургтан һәм Нязепетровскиҙан ҡунаҡтар ҡатнашты.

✓ЮНЕСКО эштәре буйынса Башҡортостан Республикаһы комитеты һәм Өфөнөң 39-сы гимназияһы онлайн режимда "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосының Халыҡ-ара уҡыуҙарын үткәрҙе. "Урал батыр" башҡорт, рус, татар, инглиз, әрмән, белорус, болгар, ҡытай, ҡырғыҙ, немец, украин, француз телдәрендә яңғыраны. Гимназия директоры Ирина Кейекбаева әйтеүенсә, был проекттың үҙенсәлеге - эпос онлайн режимында өҙлөкһөҙ, һәр бүлеге төрлө илдәр телендә уҡылды. Сара ҡатнашыусыларға башҡорт мәҙәниәте һәм халыҡ ижады менән танышыуҙан тыш, эпосты үҙенең милли колориты аша күрһәтергә мөмкинлек бирҙе.

✓Йыл башынан алып рәсми эшһеҙ статусы 1,7 мең тирәһе өфөлөгә бирелгән. Был ваҡыт эсендә 1,6 мең тиерлек эшһеҙ эшкә урынлаштырылған, 1,8 меңләп кеше иҫәптән төшкән. Бөгөнгө көнгә Башҡортостандың баш ҡалаһында 6,2 меңдән ашыу эшһеҙ иҫәпләнә, уларҙан 5,3 меңдән күберәге эшһеҙлек буйынса пособие ала. Ҡаланың вакансиялар банкында хәҙер 13,5 меңдән ашыу буш эш урыны иҫәпләнә.

*✓ Берәй мәл Ҡышҡы олимпия уйындары Урал тауҙарында - Башҡортостанда үтһә ине, тип теләйем. Шуның өсөн беҙ үҙебеҙ тырышырға тейешбеҙ! Әйҙәгеҙ, ошо олимпиада төрҙәренә ингән спорт менән дә шөғөлләнәйек.*

О, СПОРТ!

# ОЛИМПИАДА ҺЫҒЫМТАҺЫ ШУЛ:

## еңеүҙәрҙе үҙебеҙҙең спортсылар килтерһен!

**Сочиҙағы XXII Ҡышҡы олимпия уйындары йомғаҡтары буйынса Рәсәй 33 (шул иҫәптән - 13 алтын) миҙал яуланы. Ойоштороуҙы ла "иң юғары" кимәлдә тип баһаланылар. Бөгөн гәзит уҡыусылар иғтибарына был ярыштарҙы ифрат ҙур тулҡынланыу менән күҙәтеп барған дуҫтарыбыҙҙың фекерҙәрен тәҡдим итмәксебеҙ:**

**Руслан БИКЕМБӘТОВ, милли көрәш буйынса Рәсәй чемпионы:** Минең өсөн, әлбиттә, Башҡортостандан ҡатнашҡан спортсыларҙан шорттрексылар Семен Елистратов менән Руслан Захаровтың эстафетала алтын миҙал яулауы шатлыҡлы булды. Был егеттәрҙең уңышлы сығыш яһаясағына, призлы урын яуларына ышаныСым ҙур ине. Ғөмүмән, Олимпиада уйындарын ойоштороу кимәле менән ҡәнәғәтмен, хәүефһеҙлек саралары ла еренә еткереп ойошторолғайны - ә быныһы бигерәк тә мөһим бит. Әлбиттә, бер аҙ мәрәкә хәлдәр ҙә булды. Мәҫәлән, Олимпиаданы асыу тантанаһында олимпия уйындарының символы булған биш дүңгәләктең береһе асылмай ҡалыуы күптәрҙең кәйефен ҡырғайны. Уйындарҙы япҡан саҡта ла шул уҡ күренеш ҡабатланды ла, көтмәгәндә бишенсе дүңгәләк асылып китеп, тамашасының дәррәү алҡыштарына сәбәпсе булды. Был режиссерҙарҙың үҙенә күрә тамашаны йәнләндереү алымы булды, ахыры.

Ярыштарға һәм спортсыларға килгәндә, беҙҙең ил "кейәүкәйҙәр" (Ан, Уайлд икеһе бергә 5 алтын миҙал яуланы) иҫәбенә еңде, тип тә әйтергә була. Үҙебеҙҙең спортсы ҡыҙҙарыбыҙ, "киленкәйҙәр" булып, икенсе илдәргә миҙалдар алып бирешә. Кузьмина менән Домрачевалар һәм башҡалар тураһында һүҙем. Күп спортсыларыбыҙҙың - сит илдәргә, Башҡортостандыҡыларҙың - Рәсәйҙең бүтән ҡалаларына юлланыуы ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара шул. Ольга Вилухинабыҙ Новосибирск өсөн сығыш яһаны. Рәсәй йыйылма командаһына ингән спортсылар ярайһы уҡ яҡшы һөҙөмтә күрһәтте ул күрһәтеүгә, тик был уларҙың һуңғы еңеүе һәм икенсе юлы уларға бындай уңыш йылмаймаясағын аңлауы ҡыйын түгел. Спортсылар үҙҙәренең мөмкинлеге сигенә етте, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Шуға ла, теүәл 4 йылдан уҙғарыласаҡ киләһе Уйындарҙа Ванкуверҙағы хәлдәр кире ҡабатланыуы ла ихтимал.

**Лариса АБДУЛЛИНА, шағирә:** Минеңсә, был Уйындарға Сочи ҡалаһын яҡшы әҙерләгәндәр, тик спортсылар тренерҙар ҡарамағында ғына ҡалдырылған һымаҡ тойғо ҡалды, йә булмаһа, үҙ тырышлығы менән үргә ынтыла. Шуға күрә, миҙалдар һаны буйынса беҙ беренсе баҫҡыста иҫәпләнһәк тә, Рәсәй командаһы еңелде ул. Әйҙәгеҙ, ҡайһы бер төрҙәргә туҡталайыҡ. Биатлонда еңелеү - насар әҙерлекте күрһәтмәй ҙә кеүек, әммә еңелеүҙе ҡар насар булыуға һылтанып аҡларға тырышыу ҙа дөрөҫ булмаҫ, минеңсә. Яҙа атыуҙа ҡарҙың ни ғәйебе бар?! Ә хоккей ярыштары һынҡатҡыс бер "мәрәкә" булды инде. Хоккей - фигуралы шыуыу, биатлон менән бер рәттән, Ҡышҡы олимпия уйындарында халыҡ тарафынан бик яратып күҙәтелгән спорт төрө. Беҙ барыбыҙ ҙа сәмле уйын, боҙҙағы шоу көткәйнек тә, ниәтебеҙ тормошҡа ашмаған, бик бошондорҙо. Бындай команда, бындай баш тренер менән нисек еңергә уйланылар икән, тип тә уйлап ҡуйыла. Малкин, Радулов, Ковальчук кеүек тәржрибәле уйынсыларыбыҙ үҙҙәре генә ни эшләй алһын? Тағы, Рәсәйҙә "Аҡ барс" командаһы уйынсыларынан тыш, оҫталар юҡмы әллә, тигән һорау ҡалды. Ғөмүмән, дөйөм профессиональ спортҡа килгәндә,мин уйынсылар менән алмашыуға, сит ил тренерҙары менән тәжрибә уртаҡлашыуға ҡаршы түгелмен, тик бөгөн улар беҙгә үҙ шарттарын тағып маташа түгелме һуң? Шундай ҙур, ҡеүәтле Рәсәйҙә яҡшы тренерҙар, оҫта спортсылар юҡмы әллә? Бар, әлбиттә! Әлеге лә баяғы, сит илдән килтерәбеҙ ҙә, яҡшы һөҙөмтәне ҙур аҡсаға "һатып" алған булабыҙ, беҙгә Радуловтар бөгөн һәм тиҙ арала кәрәк! Ә уларҙы бит үҫтерергә лә була. Ниңә балалар спортына иғтибар аҙ икән беҙҙә, тип күптәр һыҙланғандыр әле. Үҙебеҙҙең спортсыларҙы тәрбиәләйек, тигән саҡырыуҙы тағы ҡабатларға тура килә. Ан да, Уайлд та беҙҙеке түгел ул, һәр хәлдә минеке түгел...

Сараны асыу һәм ябыу тантаналары ваҡытында бары рус халҡының тарихын ғына һөйләнеләр. Беҙ Рәсәй халҡы түгелме ни? Милли көрәште лә һаман Олимпия уйындары исемлегенә индерә алмайбыҙ бит, йәмәғәт.

Оҡшаған моменттар ҙа булманы түгел, булды. Евгений Плющенконың сығышы әсир итте. Уны һүктеләр, әммә ул шәп һәм бөйөк спортсы! Уның сығышы ваҡытында телевизорға "инеп китерҙәй" булдым, уның шыуыуын күреп иланым. Ул бит боҙҙа "шиғыр яҙҙы", ижадында онотолдо!

**Һиҙиәт ИСМӘҒИЛЕВ, Стәрлебаш районы Елембәт ауылынан РФ спорт мастерлығына кандидат:** Мин был ярыштарҙы ҙур иғтибар менән ҡарап барҙым. 1980 йылда Мәскәүҙә үткән Йәйге олимпия уйындарында ҡатнашҡанға, үҙем ғүмерем буйы спорт менән шөғөлләнгәнемә күрә, быйылғы Ҡышҡы олимпия уйындарының һәр миҙгелен йөрәгем аша үткәрҙем. Был сараны Рәсәйҙә үткәреүгә өлгәшкән ил Президенты Владимир Владимирович Путинға рәхмәт, уның тырышлығы бында һис шикһеҙ ҙур. Был аҙым менән ул илебеҙҙе спорт башланғысына туплай алды. Бына мин Мәскәүҙә үткән олимпиаданы трибуналарҙа күҙәткәс, ул ваҡиғаның эсендә ҡайнап йөшәгәс, әле булһа ундағы һәр спортсыны, уның нисәнсе урын яулауын хәтерләйем. Сочи ҡалаһына барып, планета масштабында уҙғарылған ярыштың шаһиты булған бихисап егет-ҡыҙҙар мин кисергәндәрҙе кисереүен дә аңлайым. Шунын өсөн шатланам да. Берәй мәл Ҡышҡы олимпия уйындары ысын ҡар яуып торған Урал тауҙарында - Башҡортостанда үтһә ине, тип теләйем. Шунын өсөн беҙ үҙебеҙ тырышырға тейешбеҙ, милләттәштәр! Әйҙәгеҙ, ошо олимпиада төрҙәренә ингән спорт менән дә шөғөлләнәйек, тип әйтмәксемен. Күңелде ҡырғаны шул: Рәсәйҙең күп милләтле дәүләт булыуы ғына телгә алынманы тиерлек. Һәр хәлдә, ярыштар башланғанда ла, Уйындарға йомғаҡ яһалғанда ла Рәсәйҙең эреле-ваҡлы халыҡтары күрһәтелмәне.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ҠАТЫН РИЗАЛЫҠ БИРМӘЙ

**Ҡатыным менән ике йыл инде бергә йәшәмәйбеҙ, уның менән уртаҡ балаларыбыҙ юҡ. Әлеге ваҡытта гражданлыҡ ҡатыным ауырлы, уның менән никаһыбыҙҙы рәсми теркәргә законлы ҡатыным ҡамасаулай: ул айырылышырға ризалыҡ бирмәй. Был осраҡта мин ЗАГС аша айырыла аламмы?**

Тейешле нигеҙҙәр булғанда, һәр ике яҡтан да, айырым осраҡтарҙа ир йә ҡатындың береһенең генә ғаризаһы буйынса ла Гражданлыҡ хәле акттарын теркәү органдарында айырылышыу эшен башҡарырға мөмкин. Был айырылышыуҙың иң ябай юлы. ЗАГС органдары аша айырылышыу өсөн ике нигеҙләмә кәрәк: а) ир менән ҡатын икеһе лә айырылышырға риза булһа; б) уларҙың балиғ йәшкә тиклемге уртаҡ балалары булмаһа.

Ир менән ҡатындың ризалыҡтары ЗАГС органында ҡаралғанса, яҙма рәүештә бирелә. Шунан һуң бер ай үткәс, тағы ла килеп, ҡарарығыҙҙы раҫлатҡандан һуң, айырылышыу тураһында яҙма акттар теркәү китабына индерелә һәм икегеҙгә лә ошо хаҡта таныҡлыҡ бирелә.

Ир йә ҡатындың береһенең генә ғаризаһы буйынса ЗАГС органдары аша айырылышыу түбәндәге осраҡтарҙа ғәмәлгә ашырыла: а) ир йә ҡатындың береһе суд тарафынан билдәһеҙ ғәйеп булған тип танылһа; б) ир йә ҡатындың береһе суд тарафынан юридик һәләтһеҙ тип танылһа; в) ир йә ҡатындың береһе енәйәт ҡылған өсөн 3 йылдан ашыу ваҡытҡа иркенән мәхрүм ителгән хәлдә (РФ Ғаилә кодексының 19-сы статьяһы).

Башҡа осраҡтарҙа ЗАГС органдары аша ир йә ҡатындың береһенең генә башланғысы буйынса никахты тарҡатыу рөхсәт ителмәй. Күренеүенсә, һеҙгә был мәсьәләне суд аша хәл итергә тура киләсәк.

## БУРЫС БҮЛЕНӘМЕ?

**Ирем менән айырылыштыҡ, ләкин унан алда ғына минең исемгә кредитҡа машина алғайныҡ. Ләкин минән генераль ышаныс ҡағыҙы яҙҙырып алып, уның менән күбеһенсә ирем файҙаланды һәм айырылышҡас, машинаны үҙенә алды, ә кредит түләүҙән баш тарта. Үҙем дә түләргә тырышыр инем, ләкин мин эшһеҙ тороп ҡалдым. Элекке иремде судҡа бирә аламмы?**

Судҡа юллау ғаризаһы бирә алаһығыҙ. Айырылышҡанда ир менән ҡатынға уртаҡ милекте лә, бурыстарҙы ла бүлешергә тура килә. Бурыстар ир менән ҡатындың өлөштәренә тейгән милеккә ярашлы бүленә. РФ Ғаилә кодексының 38-39-сы статьялары быға нигеҙ булып тора. Тик шуны ла онотмағыҙ: ир менән ҡатындың уртаҡ милекте бүлеү хаҡында талаптары улар айырылышҡандан һуң өс йыл дауамында ғына ҡабул ителә.

## ҮКҺЕҘ ЕТЕМ КЕМ БУЛА?

**Былтыр минең бер туған ҡустым автомобиль аварияһында һәләк булды. Уның ҡатыны иҫерткес эсемлектәр ҡулланғаны өсөн әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителгән. Уларҙың 7 йәшлек улдары минең ҡарамаҡта (мин - опекун). Ул үкһеҙ етем тип һаналамы һәм уға икеләтә пенсия түләнәме?**

Үкһеҙ етемдәргә атаһы ла, әсәһе лә мәрхүм булғандар ғына инә. Әгәр уларҙың береһе тере булһа, пенсия хоҡуҡиәтенә ярашлы, бала үкһеҙ етем тип һаналмай. Шуға күрә һеҙҙең ҡустығыҙға икеләтә пенсия түләнмәйәсәк.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡурылдай (бронхит)

❖ Үпкә сирҙәренән дауа: 300-әр грамм алоэ һуты, бал, ике йомортҡа ағы, 2 лимон һуты, 1 шешә коньяк. Ун көн ҡараңғы урында тоторға.

❖ Татлы ризыҡтарҙан баш тартығыҙ, сөнки шәкәр бактерияларҙы туҡландыра. Ғалимдар раҫлауынса, 5 ҡалаҡ шәкәр иммун системаһы эшмәкәрлеген 4 сәғәткә туҡтатып тора.

❖ Һыуыҡ тейгәндә һәм ҡурылдай ваҡытында 3 ҡалаҡ касторка майын 1 ҡалаҡ скипидар менән болғатырға, күкрәкте майларға һәм төрөнөп ятып торорға.

❖ Бик һөҙөмтәле сара: урта ҙурлыҡтағы 1 лимон, 200 грамм бал, 20 грамм глицерин. Лимонды һыуға һалып, талғын утта 20 минут ҡайнатырға һәм бал өҫтөнә һығырға, глицерин өҫтәргә. Ашар алдынан көнөнә 3 тапҡыр эсергә. Йүткереүҙе баҫа, тын юлдарын йомшарта.

❖ Әбүғәлисина тәжрибәһе буйынса, һары май йүткереүҙе йомшарта, бигерәк тә бал, шәкәр, әсе миндаль ҡушылһа, яҡшы.

## Гангрена

❖ 3-4 дегәнәк япрағын эҫе һыу менән бешекләп, гангреналы урынға һалырға, нығ итеп бинт менән бәйләргә, өҫтөнән полиэтилен, йылы шәл урарға. Иртән һәм кисен яңыһына алыштырырға. Боронғо табиптар ҙа ваҡланған дегәнәк япраҡтарын дауалау өсөн ҡулланған.

❖ 100 грамм спирт, 100 грамм таҙа балауыҙ, 100 грамм аҡ майҙан мазь яһарға. Май һәм балауыҙҙы иретеп, уттан алғас, спирт өҫтәргә һәм болғатырға.

❖ Ҡара икмәкте күп итеп тоҙ ҡушып, оҙаҡ итеп сәйнәргә һәм яраға һалып бәйләргә, бер нисә сәғәттән һуң алыштырырға. Был рецепт буйынса икмәкте ваҡлап торарға ла, һыуҙа ебетергә лә түгел, мотлаҡ сәйнәргә кәрәк.

❖ Яраға сей һыйыр бауыры киҫәге һалырға. 2-3 сәғәттән бауырҙың яраға тейеп торған өлөшөн ҡырҡып ташлап, тағы бәйләргә. Һуңынан бәүел һәм бешекләнгән дегенәк япрағынан компресс яһарға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Икенсе илдән килгән бер кешенең әйткәне әле лә ҡолағымда сыңлап тора: "Мин Башҡортостанға килгәс, ике нәмәгә аптыраным: беренсеһе - эскелек, икенсеһе - шундай бай республика, ә халҡы ярлы йәшәй".*



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Һейҙек ҡыуығы шешеүенә им

2. Ауырыуҙы миндеккә ебәреүҙең икенсе алымы ла бар. Ҡыҙҙырылған ҡыҙыл кирбескә биҙрәгә һалалар. Уның өҫтөнә миндек ҡуялар. Сирле кеше миндеккә кесе ярау итә лә уны баш аша тәнъяҡҡа ташлай.

3. Ерҙән тейенеү йәки кесе ярау итә алмау ауыруын яман урынға баҫыу менән бәйләйҙәр. "Ерҙән тейенеү" ерҙән тотоп алыуҙы аңлата. Шуға ерҙән ингән ауырыу ергә китергә тейеш. Ауырыуҙы ергә тәрләсә ебәреп була. Мәҫәлән, бының өсөн бер яҡлы тимер һуҡа файҙаланырға мөмкин. Ул инә һуҡа тип атала. Шул һуҡаны башта утта ҡыҙҙыралар, унан һуң сирле кеше уға кесе ярау итә һәм ошо доғаны уҡый:

*Ер атаһы Ерәнсәсәнгә*
*Аҙығын бирәм.*
*Көн инәһе Көмөшбикәгә*
*Аҙығын бирәм.*

Унан һуң доғаны шундай һүҙҙәр менән тамамлайҙар:

*Сәбәп минән булһын,*
*Сихәт Алланан булһын, -*

Доға бер нисә тапҡыр ҡабатлана.

4. Ҡайһы бер осраҡта ауырыу кешене ергә ултыртыу ысулы менән имләйҙәр. Был им шунан ғибәрәт: таҙа ергә соҡор ҡаҙалар, шунан бағымсы һауыттарҙағы һыуға, соҡорға өрөп, өс мәртәбә доға уҡый. Доға уҡығандан һуң ауырыу кеше арҡаһын ҡоньяҡ-көнбайышҡа ҡуйып, соҡор өҫтөнә баҫа, бағымсы уның иҙеүенән кукрәгенә һәм арҡаһына өшкөрөлгән һыу ҡоя. Унан һуң ауырыу кеше бер кем менән дә һөйләшмәй, яҡ-яғына ҡарамай, өйөнә ҡайтып китә. Өйөнә ҡайтҡас, кейеме кипкәнсе түшәктә ята. Шунан ул һауыға икән.

5. Ерҙән тейенеп аяҡ һыҙлағанда, мунса ингән һенерткене атланып, күтәрмә аҫтына һыу һибәләр.

**Өшкөрөү име.** Ерҙән тейенгәндә имсе әбейҙәр күҙҙән өшкөрәләр ине.

**Тел - теш менән бәйле им-том.** Бәғзе кеше тураһында тәрлә ғәйбәт һөйләһәләр, уны ҡарғаһалар, кеше иҫнәп ауырый. Уның йөҡоһо килә, хәлһеҙләнә, ашағыһы килмәй. Хатта ғаилә ағзалары, малы ла ауырыҡһына. Бындай ауырыуҙы тел-теш баҫыу, тел-теш сире тиҙәр. Тел-тешкә ҡаршы тәрлә им ҡулланылған.

**Тел - теш ҡырҡыу.** Тел-теш баҫһа, бағымсы бер еп менән ауырыуҙың үксәһенән алып елкәһенә тиклем буйын, ә икенсе еп менән күкрәк әйләнәһен үлсәгән. Унан һуң ике епте лә параллель итеп бергә һалып, уларҙы ҡайсы менән ваҡ киҫәктәргә киҫә. Шул уҡ ваҡытта ул һорау-яуапҡа ҡоролған әпсен әйтә:

*Ни ҡырҡаһың?*
*Тел-теш ҡырҡам.*
*Ни ҡырҡаһың?*
*Тел -теш ҡырҡам.*

Имсе епте киҫеп бөтөргәнсе әпсен ҡабатлана. Унан һуң "Ғәйбәт туҡталһын, хуш, телең-тешең баҫылһын!" тигән һүҙҙәр әйтеп, ептәрҙе ергә күмеп ҡуя. Имсе, доғаны ауырыу кешенең исеме менән ҡағыҙға яҙып, уға бетеү итеп бирә. Был ҡағыҙ тукыма киҫәгенә төрөп тегелә һәм кейемгә беркетелә. Был им-томдо үтәү өсөн ауырыуҙа бер тапҡыр ҙа файҙаланылмаған үткер ҡайсы булырға тейеш. Ышаныуҙар буйынса, файҙаланған ҡайсы кешеләрҙең ғәйбәтенә, яла яғыуына ҡаршы тора алмай (тотонолған ҡайсы телде баҫмай). Имләү тамамланыу менән ауырыған кеше ҡайсыны кемгә булһа ла хәйер итеп бирергә тейеш. Уны имсегә бирергә йәки ауырыуҙың үҙендә ҡалдырырға ярамай. Им-томдо өс тапҡыр ҡабатларға кәрәк.

**Тел-теш төнәү.** Тел-теш баҫһа, ҡырҡ төйөн төйөп, шуларҙы һамаҡ әйтеп, ҡырҡ тапҡыр ҡайсы менән киҫкәндәр.

**Һыу өшкөрөү.** Тел-теш баҫһа, таҙа һыуҙы өшкөрәләр һәм шул һыу менән ауырыуҙы ҡойондоралар.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

---

УҠЫТЫУСЫ ҺҮҘЕ

# УҢЫРБЫҘМЫ, ТУҢЫРБЫҘМЫ?

## Шундай һорау алдына ҡуя реформалар



**Һуңғы йылдарҙа мәғариф өлкәһе туктауһыҙ реформаларға дусар ителә. Был реформаларҙың нимәгә алып киләсәген беҙ бер нисә тиҫтә йылдан һуң ғына белә алырбыҙ, моғайын. Ләкин ул осорға тиклем бөтә уҡытыу системаһы юҡҡа сығып ҡуймаһа ярар ҙа, тигән борсолоу бар. Әгәр хаталанғанбыҙ икән, был хаталар өсөн яуап биреүселәр булырмы? Белмәйем. Әммә тәжрибәләр дауам итә. Иң үкенеслеһе шул: ул реформаларҙы мәктәптә бер көн дә эшләп ҡарамаған кешеләр үткәрә.**

Ҡулыма бер документ килеп эләкте. Ишембай районы укытыусыларының 1938 йылдың 5 ғинуарында үткәрелгән кәнәшмәһендә күтәрелгән ҡайһы бер проблемалар теркәлгән унда. Уны бик иғтибарлап уҡып сыҡтым да, үҙемә үҙем һорау бирҙем: әлеге көндә нимә үҙгәргән һуң? "Коммунистик", "большевистик" һәм "дингә ҡаршы тәрбиә" тигән һүҙҙәргә иғтибар итмәһәң, бер нәмә лә үҙгәрмәгән кеүек. Мәктәптәрҙә информацион-коммуникацион технологиялар, электрон дәреслектәр, дистанцион уҡытыу алымдары, интернет селтәрҙәре үҫешһә лә, төп проблемалар хәл ителмәй, беҙ һаман бер урында тапанабыҙ һымаҡ. Йыл һайын август кәнәшмәләре үткәрелә, резолюция ҡабул ителә. Ә резолюция үтәләме, йәки уның нисек үтәлеше тураһында халыҡ алдында (бында уҡытыусыларҙы иҫәпкә алмайым) сығыш яһаламы?

Совет власы мәктәбе күптән тарих биттәрендә ҡалды, әммә шул осорҙа ул бик күп таланттар, күренекле шәхестәр тәрбиәләп үҫтерҙе. Ә бөгөнгө техника үҫешкән заманда күпселек уҡытыусылар уҡыусыларҙың белем кимәленең йылдан-йыл түбәнәйеүен билдәләй. Төп сәбәптәрҙең береһе - уҡытыусыларҙың балалар менән эшләргә ваҡыты ҡалмай, сөнки уларҙы төрлө ҡағыҙ тултырыу, отчет биреү, йәмәғәт эштәре менән баҫалар. Уҡытыусыларҙың көндәлек, айлыҡ эштәрен барлап сығайыҡ: дәрес биреү, яҡшы уҡыған һәм артта ҡалған уҡыусылар менән эшләү, балаларҙы (шул рәттән ҡайһы бер ата-әсәләрҙе лә) тәрбиәләү, предмет буйынса төрлө саралар ойоштороу, ата-әсәләр йыйылышы үткәреү, журнал тултырыу, эш программаһы төҙөү, көндәлек дәрес планы яҙыу. Шуларға өҫтәп, уҡыусыларҙы олимпиадаларға, конкурстарға, Берҙәм дәүләт имтиханына, ғилми-эҙләнеү эштәренә әҙерләү, ҡосаҡ-ҡосаҡ дәфтәрҙәр тикшереү, асыҡ дәрестәр, дистанцион дәрестәр күрһәтеү, электрон көндәлек/журналды тултырыу, профессиональ конкурстарҙа ҡатнашыу, өс йылға бер тапҡыр курстар, биш йыл һайын аттестация үтеү, методик тема өҫтөндә эшләү, методик ойошмаларҙа, педсоветтарҙа сығыш яһау, уҡыусыларҙың йәйге ялын ойоштороу, рейдтарға йөрөү, вебинарҙарҙа, фәнни конференцияларҙа, семинарҙарҙа ҡатнашыу, махсус курстар, түңәрәктәр алып барыу, уҡыусылар менән концерттарға, экскурсияларға, походтарға йөрөү, ваҡытлы матбуғат баҫмаларына яҙылыуҙы тәьмин итеү һәм башҡалар. Бынан тыш, уҡытыусы үҙе түләп төрлө курстар үтә, ИКТ буйынса белемен камиллаштыра, кабинетын йыһазландыра, дидактик материалдар туплай, методик портфолиоһын булдыра. Унан башҡа иҫәпһеҙ-хисапһыҙ йәмәғәт эштәрен дә башҡара ул.

Белгород өлкәһе губернаторы Евгений Савченко бер матбуғат конференцияһында: "Иҫәпләп сығарыуыбыҙ буйынса, беҙҙең өлкә уҡытыусылары барлыҡы 129 төрлө отчет тапшыра. Бөгөн шуларҙың өҫтән бер өлөшөн ҡыҫҡарттыҡ. Әлеге көндә депутаттар һәм башҡарма власть комиссияһы ҡалған отчеттарҙың яртыһын ғына ҡалдырыу өҫтөндә эшләй," - тип белдерҙе. Уның уйынса, уҡытыусыларҙың 99 процент эше уҡыусылар менән аралашыуға ҡоролорға тейеш, педагогтар балаларға үҙҙәренең белемен һәм тәжрибәһен еткерергә бурыслы.

Ысынлап та, уҡытыусыларҙың дәреҫкә төплө әҙерләнергә, уҡыусылар менән эшләргә ваҡыты етмәй ҡала. Етмәһә, мәғариф булеге, Обрнадзор, Янғын күҙәтеүе, прокуратураның планлы һәм пландан тыш тикшереүҙәре барлыҡ ниәтләгән эштәрендән ситләштерә. Бына шул. Ә уҡытыусыға иғтибар, йылы һүҙ етәме һуң? Уҡытыусының эш хаҡын арттырҙыҡ, тип һөрән һалабыҙ ҙа, тағы уның елкәһенә йөк өҫтәйбеҙ. Уҡытыусы һөнәренең ҡәҙере юҡ бит. Гәзит-журналдар, Үҙәк телевидение аша уҡытыусыларға күпме ҡара яғыла.

Беҙҙең республикала йыл уҡытыусыһы конкурстарында еңеү яулаған күпме уҡытыусылар бар. Уларҙың бай тәжрибәһе, профессиональ оҫталығы тулы кимәлдә ҡулланылмай. Ысынында, ошо конкурста ҡатнашҡан күп уҡытыусылар үҫештән туктап, аҙаҡ бө-төнләй һүнеп ҡуялар. 2012 йылда мин Мордовияның Саранск ҡалаһында үткән туған тел уҡытыусыларының Бөтә Рәсәй оҫталыҡ дәресе конкурсында ҡатнашып, ҙур тәьҫораттар алып ҡайттым. Саранск ҡалаһының 19-сы гимназияһының эш тәжрибәһе мине хайран итте. Ҡайтҡас, күптәргә үҙемдән уй-теләктәремде еткерергә тырыштым, әммә ишетеүсе булманы. Шундай уҡ хәл талантлы уҡыусылар менән ҡабатлана. Мәктәптән тыш бер ҡайҙа ла тиерлек тулы кимәлдә талантлы балалар базаһы булдырылмаған. Бындай уҡыусыларҙың үҫеше йылдан-йыл күҙәтеп барылырға тейеш тейешлеккә. Был эш менән мәктәп кенә түгел, ә мәғариф хеҙмәткәрҙәре лә, юғары уҡыу йорто етәкселәре лә шөғөлләнергә тейеш. Беҙ уларға буласаҡ студенттар әҙерләйбеҙ бит. Март, апрель айҙарында мәктәптәргә сығып, осрашыуҙар үткәрәләр ҙә, шунан абитуриенттарҙы көтөп ултыралар. Минә әлеге көндә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының эш алымдары бик оҡшай, ә башҡа уҡыу йорттары нимә ҡарап яталарҙыр...

Күпселек осраҡта беҙ нимә ҡушалар, шуны ғына эшләргә күнеккәнбеҙ, ә үҙебеҙ белеп эшләмәйбеҙ. Күптәр дәрестән һуң уҡыусылар менән эшләүгә ҡарағанда, репетиторлыҡ менән шөғөлләнеүҙе артыҡ күрә, сөнки һәр сәғәте - аҡса. Үҙен генә ҡайғыртҡандар арта. "Йәштәргә эш юҡ", тип һөрән һалалар, ә пенсияға сыҡҡандар йәштәргә эш урыны бирергә уйламай ҙа. Дөйөм алғанда, мәғариф системаһы алдында ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар ысынбарлыҡҡа тура килеп етмәй. Беҙ, тематик планға ярашлы рәүештә, дәрестә балаларға белем, тәрбиә бирәбеҙ, ә тормошҡа әҙерләмәйбеҙ, дөрөҫ йәшәргә өйрәтәбеҙ, ә нисек йәшәргә өйрәтмәйбеҙ. Хәҙерге техника заманында, базислы уҡыу планына ярашлы, уҡыусыларҙың 8-се кластан ғына "Информатика" дәресен өйрәнә башлауы аптырата. Мәктәптәрҙә компьютерҙар күбәйҙе, ә уларҙы көйләүсе техник-инженерҙар юҡ - оптималлектер заманы бит, йәнәһе.

Эйе, системаны үҙгәртмәйенсә тороп, алға китә алмаясаҡбыҙ. Шуға ла беҙҙең республикаға, районыбыҙға инвесторҙар килмәй. Икенсе илдән килгән бер кешенең әйткәне әле лә ҡолағымда сыңлап тора: "Мин Башҡортостанға килгәс, ике нәмәгә аптыраным: беренсеһе - эскелек, икенсеһе - шундай бай республика, ә халҡы ярлы йәшәй". Халҡыбыҙҙың нисек йәшәүендә мәғариф системаһының да өлөшө ҙур. Халыҡты беҙ тәрбиәләйбеҙ һәм белем бирәп үҫтерәбеҙ бит. Физиканан ерҙең тартыу көсө барлығын яҡшы беләбеҙ. Һәр нәмәне юғарыға сөйһәң дә, ул киренән ергә әйләнеп төшә. Шуның һымаҡ, беҙҙең эшләгән изгелектәр ҙә, яуызлыҡтар ҙа үҙебеҙгә әйләнеп ҡайтасаҡ. Уҡыусыларға биргән тәрбиә һәм белем аҙаҡ илебеҙгә хеҙмәт итергә тейеш. Ниндәй белем - шундай һөҙөмтә. Уйланырға урын бар...

**Рифат ӘЙҮПОВ,**
**Ишембай ҡалаһындағы Ә.Вәлиди исемендәге Башҡорт гимназия-интернатының башҡорт теле уҡытыусыһы.**

***✓ Оло яу юлына сығыр алдынан 112-се Башҡорт атлылар дивизияһында милли составы буйынса башҡорттар 81,4 процент, татарҙар - 14,5, урыҫтар - 3,3 процент тәшкил иткән, ҡалғандары - төрлө милләт вәкилдәре.***

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**"Ҡәҙерле редакция! Күптән түгел бер юғары вазифалы ғына иптәштең сығышында "Башҡорт атлылары дивизияһы составында чечендар ҙа, үзбәктәр, украиндар ҙа һуғышҡан..." тигән фекер яңғыраны. "Башҡорттарҙыҡы ғына түгел ул дивизия", тип әйтеүен әйтмәне, ләкин ишараһын мин шулай аңланым. Ә бит дивизияны ойошторғанда ул ысынлап та 82 процент башҡорттарҙан ғына торған икәнен һәр кем белә. Тарихыбыҙға һөжүм барғанын, күп ҡаҙаныштарыбыҙҙы кемдәрҙер үҙләштерергә тырышҡанын да беләбеҙ. Башҡорт атлылары дивизияһы тураһында әйтелгән әлеге һүҙҙе лә мин шул уҡ беҙҙең дивизиябыҙ тарихы әһәмиәтен кәметергә тырышыу тип ҡабул иттем. Шуға ла йәш быуынға ошо әле генә булған тарихыбыҙ тураһында ла ҡат-ҡат һөйләргә, мәҡәләләр баҫтырырға кәрәктер ул, тип уйлайым..." Уҡыусыбыҙҙың ошо хатын күҙҙә тотоп, өлкән журналист Фәрит Вахитовтан түбәндәге мәҡәләне яҙҙырып алдыҡ.**

# БАШҠОРТ АТЛЫЛАРЫНАН...

## тарихтарға һыймаҫ дан ҡалған



- "Башҡорт кавалерия дивизияһы башҡорттарҙан ғына тормағандыр бит инде?" тигән һорауҙы миңә лә биргәндәре бар, - тип яҙа Фәрит ағай Вахитов. - Совет власы быға юл ҡуймағандыр, йәнәһе. Командирҙар "Вперед!", "Бегом!" тигән командаларҙы башҡортса бирмәгәндер бит инде, йәнәһе. Быныһына ла ышаныслы дәлилдәрем бар: хатта Хәрби ант тексы ла башҡорт телендә булған! Оло яу юлына сығыр алдынан 112-се Башҡорт атлылар дивизияһында милли составы буйынса башҡорттар 81,4 процент, татарҙар - 14,5, урыҫтар - 3,3 процент тәшкил иткән, ҡалғандары - төрлө милләт вәкилдәре. Абруйлы тарихсы Т.Х. Әхмәҙиевтың "Башкирская гвардейская кавалерийская" китабында (Өфө, "Китап" нәшриәте, 1999) башҡа мәғлүмәттәр ҙә бар. Әйтәйек, колхозсылар - 66,6, эшселәр 26 процент булған.

Ставканан, илдә 20 милли атлылар дивизияһы булдырылырға тейеш, тигән фарман төшөрөлгәс, Башҡортостан 112-се һәм 113-се дивизияларҙы төҙөп, фронтҡа оҙатыу хәстәрлеген күрә башлай. Милли тигәс, төп милләт вәкилдәрен саҡырыу күҙ уңында тотола. 1942 йылдың 17 ноябрендә ВКП(б) өлкә комитеты бюроһы һәм БАССР Совнаркомы берлектә ҡабул иткән ҡарарҙа билдәләнгәнсә, ике дивизия сафтарын фәҡәт "урындағы төп милләт вәкилдәре" иҫәбенә тулыландырыу бурысы ҡуйыла. Ҡала һәм район комитеттарына, хәрби комиссариаттарға был талапты ҡәтғи үтәү йөкмәтелә. "Йәше ҡырҡтан уҙмаған, сәләмәтлеге ныҡ һәм мораль йөҙө шик тыуҙырмаған башҡорттарҙы һайлап алырға" тигән мотлаҡ шарттар була был фарманда. Башҡорт атлылар дивизияһына яҙылыуҙы башҡорт милләте вәкилдәре оло мәртәбә һанай. Милли дивизия ойошторола, тигән хәбәр ишетелгәс, бронь бирелгән ир-егеттәр ҙә фронтҡа китеү тураһында теләктәрен белдереп, ғариза яҙа башлай. Дим районына төркөм-төркөм добровoлецтар ағыла. Башҡортмо ни инде уртаҡ Ватаныбыҙ Рәсәй иленә ҡурҡыныс янағанда ситтә ҡала торған кеше!?

Тағы шул ҡыҙыҡ: командирлыҡҡа тәғәйенләнергә тейешле офицерҙар фронттан, ут эсенән ҡайтарыла. Бына бер миҫал: Мәскәү янында ноябрь көндәрендә барған көсөргәнешле һуғыш яланынан (окоптарҙан!) Подольск ҡалаһына 14 офицер саҡырып алына. Өфөгә ҡайтарылғас, барыһы ла тиерлек юғары вазифаға - эскадрон командирлығына тәғәйенләнә. Ә майор Гәрәй Нафиҡов - полк командиры (сығышы Миәкә районынан) булып китә.

Баймаҡ уҙаманы А.Үтәғолов яҙмаларынан өҙөк: "Баймаҡ районы эшсәндәре, 112-се кавалерия дивизияһы ойошторрласаҡ, тигән хәбәрҙе хуплап ҡабул итте. Дивизияға яҙылырға теләүселәрҙән ғаризалар ағыла башланы. Этҡол тулы булмаған мәктәп директоры Исхаҡ Йәнбәков, мәҫәлән, үҙенең ғаризаһында былай тип яҙа: "Ватаныбыҙға ҡурҡыныс килгәндә тыныс була алмайым. Мине үҙ теләгем менән атлы дивизияға яҙығыҙ. Фин һуғышында ҡатнаштым. Дошманға ҡаршы һуғыша беләм". Икенсе бер доброволец Ибраһим Әбсәләмов яҙа: "Һөйөклө Ватанымдың бәйһеҙлеген ҡаным-тәнем менән яҡларға әҙермен. Мине кавдивизия сафына яҙығыҙ". Баймаҡтар дивизияға ярҙам йөҙөнән 500 ат, 250 пар саңғы, 100 фронт санаһы һ.б. кәрәк-яраҡ әҙерләп бирә. Унан һәр буласаҡ һалдат йылы кейем менән тәьмин ителә".

112-се дивизия Өфө ҡалаһының Дим районында һәм яҡындағы ауылдарҙа, 113-сө дивизия Благовещен ҡалаһында һәм ошо районның Николаевка ауылында урынлаша. Ике дивизия башлыса добровoлецтар һәм саҡырылыусылар менән тулыландырыла, ләкин 113-сө дивизияға кешеләр етешмәгәс, икенсенән, фронтта хәлдәр насарайыуы сәбәпле, ундағы һалдаттарҙың күпселек өлөшө фронтҡа оҙатыла, ҡалғандары 112-се дивизияға ҡушыла. 112-се кавдивизияға кешеләр республиканың 37 районынан саҡырыла. Туймазынан - 245, Баймаҡтан - 207, Күгәрсендән - 188, Учалынан - 187, Ғафуриҙан - 174, Миәкәнән - 126 кеше. Политхеҙмәткәрҙәр республикала яуаплы вазифа биләгән һәм сыныҡҡан кадрҙар иҫәбенән һайлап алына.

112-се дивизияға командир итеп фронттан полковник М.Шайморатов ҡайтарыла. Ул Ҡырмыҫҡалы районының Биштәкә ауылында (бөгөнгө Шайморат) тыуып үҫкән. Армия сафына 1919 йылдың 18 июнендә алынған. Шул мәлдән бирле ул яуаплы һәм юғары вазифаларҙа, хатта Генштабта, разведка бүлегендә, оҙаҡ йылдар Ҡытайҙа хәрби атташе сифатында Совет Хөкүмәтенең мөһим бурыстарын үтәгән. Хәрби Академия тамамлаған, ике "Ҡыҙыл Байраҡ" ордены менән бүләкләнгән, 1941 йылда полк командиры булып, Мәскәүҙе дошман ғәскәрҙәренән һаҡлауҙа батырлыҡтар күрһәткән. Шайморатов Өфөгә 1941 йылдың 25 декабрендә килеп төшә һәм шул көндән эш башлай.

275-се кавполктың комиссары С.А. Әлибаев яҙмаларынан: "Полковник Шайморатов килеү менән дивизияға яңы ҡот, йәм инде, дәрт, рух артты. Бәхеткә, полковник бер ҡараштан барыбыҙға ла бик оҡшаны. Уның бик әҙерлекле, юғары культуралы кадровый офицер икәнен шунда уҡ аңланыҡ. Ихласлығы, кешелеклелеге, баҫалҡылылығы күҙгә ташлана: бөтә торошонда аҡыл, йылылыҡ, тәбиғи ҡыйыулыҡ, рух көсө кешеләрҙе үҙенә ылыҡтырып тора..."

Дивизия ойошҡан 1941 йылдың декабрь айы ил өсөн үтә көсөргәнешле була. Вермахт ғәскәрҙәре Мәскәүгә яҡынлай. Ил халҡының "Йә, Хоҙай!" тип торған көндәре. Шайморатов шунда уҡ һуғышҡа әҙерлек уйындарын әүҙемләштереп ебәрә, системаға һала. "Һалдаттарҙы өйрәтер өсөн үҙегеҙ өйрәнегеҙ. Кавалерия бөтөнләй ят нәмә түгел. Башҡорт аяғына баҫҡан көндән тиерлек һыбай йөрөй башлай. Шуға күрә уға кавалерия үҙенсәлектәрен үҙләштереү еңел бирелә", - ти ул. Кесе командирҙар мәктәбе эшләп китә, бер-ике айҙан әлеге рядовойҙар сержант званиеһы алып, отделение-бүлексә командирына тиклем үрләтелә тора.

1942 йылдың 20 февралендә буласаҡ яугирҙәр беренсе оло һынау - көньяҡ Урал округынан талапсан комиссия тикшереүе үтә. Ыңғай баһалама алғас, дивизия (ул бығаса тулыһынса республика тәьминәтендә була) тулы ҡанлы ғәскәри берәмеккә әйләнеп, Оборона Халыҡ комиссариаты ҡарамағына күсерелә. Дәүләт Оборона комитеты ағзаһы маршал К.Ворошиловтың килеп, Башҡорт дивизияһына ярҙам ҡулы һуҙыуы, ыңғай ҡарашта булыуы һалдаттарға шулай уҡ көс-дәрт өҫтәй.

Тағы бер иҫтәлекле ваҡиға - 22 мартта дивизияға Башҡортостан Хөкүмәтенең байрағы һәм халыҡтың наказын тапшырыу тантаналары үтә. Был көндө Дим районы шаулап тора. Үҙәк майҙанға полктар сығып теҙелә. Бар ерҙә күтәренкелек, "Беҙ барыбер еңәсәкбеҙ!" тигән ышаныс бағлауҙар. Тантаналарҙа иң юғары вазифалы республика етәкселәре ҡатнаша. Байраҡ ҡабул итеп алғанда Шайморатовтың ергә теҙләнеп, уның ефәк суҡтарын ҡулына алыуы, ҡайнар ирендәренә тейҙереп үбеүе кемдәрҙе генә тетрәндермәне икән? Шунан Шайморатов республика етәкселегенә һәм халҡына мең-мең рәхмәттәр әйтә һәм "Беҙ был байраҡҡа тоғролоҡ һаҡлап, дошманды аяуһыҙ ҡыйратасаҡбыҙ!" тип вәғәҙә бирә.

**Фәрит ВАХИТОВ.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Ҡатын-ҡыҙҙар кейемен һүрәтләүгә күскәндә шуны билдәләп китергә кәрәк, улар тышланмаған тунды бик һирәк кейгән. Был ярлыларҙың ҡышҡыһын тунһыҙ йөрөүен, ә инде байҙарҙың тундарҙы яҡшы туҡыма менән булмаһа ла Урта Азиянан килтерелгән ярымебәк туҡыма менән тышлатырға тырышыуынан килә.

Ғәҙәти *бәрән тун* киң булһа ла, һәр саҡ билле итеп тегелә, ҙур булмаған ултырма яғалы була һәм туҡыма менән тышлана. Ул һул яҡҡа ҡаплана, билендә тун ситенә тегелгән ептәр менән бәйләнә, бер генә төймәгә ҡаптырыла. Ирҙәр тунынан айырмалы, ҡатын-ҡыҙҙар туны бер ваҡытта ла билбау менән бәйләнмәгән. Һарыҡ тиреһенән тегелгән тундан тыш, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында бары бик байбисәләр генә кейгән *басә тун* - төлкө аяҡтары тиреһенән тегелеп, Урта Азиянан килтерелгән ярымебәк туҡыма менән тышланған һәм ҡама тиреһе менән ҡаймаланған тун айырым әһәмиәткә эйә булған. Тун кеүек оҙон, күп осраҡта тубыҡтан түбән булған икенсе өҫ кейеме *аҡ сәкмән* йәки *бисәләр сәкмәне* була (һүрәт). Ул бары тик аҡ буҫтауҙан ғына тегелә. Был сәкмәндәр тураһында И. И. Лепехин, улар халатҡа оҡшатып тегелгән, ситтәренән ике рәт мәрйен менән биҙәлгән, ә алғы өлөшөндә мәрйен менән петлицалары ла биҙәлә, тип яҙа. Ир-ат сәкмәне кеүек үк, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы ла бер ниндәй билбау менән дә бәйләнмәгән һәм ҡаптырылмаған, теләгән яҡҡа ҡапланған. Ең, елкәлек, итәк ситтәрендә, ҡаптырмаларында ул киң ҡыҙыл һәм тар ғына һары йәки йәшел туҡыма менән ситләтелә. Ҡаптырма буйлап, бигерәк тә яғанан аҫтараҡ арҡа буйында төҫлө туҡыманан беселгән өсмөйөш һәм дүртмөйөштәр, шулай уҡ төҫлө буҫтауҙың спираль формаһында бөгөлгән тар киҫәктәр тегелә. Бынан тыш, ҡулбашында, ең остарында, арҡаһында, ҡаптырма ситендә һәм итәк ситтәрендә йөн туҡыманан йондоҙсоҡтар, өсмөйөштәр сигелә; төҫлө туҡыманан киҫелгән суҡлы фигуралар тегелә. Бындай сәкмәнде оло ҡыҙҙар һәм йәш ҡатындар кейгән. Оло йәштәге ҡатындарҙың сәкмәне биҙәлмәгән.



Беселеше буйынса сәкмәнгә яҡын торған ҡатын-ҡыҙҙар костюмы - *елән* - ирҙәр еләненән билендә тар булыуы менән айырылып торған. Сәкмәндән айырмалы ул эслек ҡуйып тегелгән һәм бик йыш күкрәктә тимер ҡаптырмалы булған, ҡаптырма булмағанда итәктәр күкрәкте асып торған. Ныҡ биҙәлгән елән бөрйән, ҡыпсаҡ һ.б.ырыуҙарҙың бай ғаиләләрендә осрай. Башҡа биҙәүестәрҙән тыш, уларға *яурынса*, *бөйөрләк*, арҡа буйында өҫкө яҡтан алтын йәки көмөш суҡлы *елән елкәлеге* тегелә. Уларға сулпы һәм мәрйендәрҙән эшләнгән, тәңкәле өсмөйөштәрҙең өҫтәлеүе башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының был костюмды биҙәүгә айырым тырышлыҡ һалыуын раҫлай. Биҙәлеүенә ҡарап, *уҡалы елән* (һүрәт), *тәңкәле елән*, *ҡумбаҙлы елән*, *соғалы еләнд*е айырып йөрөткәндәр.



**✓ *Беҙ Башҡортостаныбыҙға ҡайтып, һәр кем үҙенең өлкәһендә бына тигән белгестәр булып, республикабыҙға хеҙмәт итергә, тигән хыял менән янабыҙ.***



**Алдыңа алған маҡсатыңды тормошҡа ашырыу өсөн һин ниндәй ут-һыу аша үтергә әҙерһең, йәш замандаш? Үҙеңдә теләһә ниндәй кәртәләрҙе емерер көс һаҡланғанын беләһеңме? Әллә ул кәртәләр һиңә алға барырға, маҡсаттарыңды тормошҡа ашырырға ҡамасаулай, тип һанайһыңмы? Йәнә, яҡын киләсәктә туған халҡыңа ниндәй файҙа килтерергә теләр инең? Әгәр ошо һорауҙарҙың береһе булһа ла һине ҡасан да булһа бер борсоған икән, тимәк, бөгөнгө әңгәмә тап һинең кеүек уйлы уҡыусыларыбыҙ өсөн әҙерләнгән. Бөгөн беҙҙә ҡунаҡта - "Мәскәү һәм Санкт-Петербургта уҡыусы башҡорт студенттары һәм аспиранттары берлеге" рәйесе Азат БАДРАНОВ, берлектең әүҙем ағзалары -Мәскәү дәүләт юғары иҡтисад мәктәбе фәнни- тикшеренеүҙәр университетының 4-се курс студенты Фатима ЯНБАЕВА һәм К.Циолковский исемендәге Мәскәү авиация-техник институтының 4-се курс студенты Азат ХӘЛИУЛЛИН.**

# БЕЛЕМГӘ, МАҠСАТҠА

## аҫыл асылыбыҙ

**▸ Боландар, кәзәләр, сайғаҡтар йә бүтән төрлө һөтимәрҙәр тырым-тырағай таралып, үлән утлап йөрөгән саҡта, берәй йыртҡыс һөжүм итһә, тәүгеләре йәһәт кенә берләшеп ала. Хәүеф янаған осраҡта берләшеү - кешегә лә хас сифат. Ә һеҙҙең Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта ойошоп йәшәүегеҙҙең төп сәбәбе ниҙә? Был ойошоу үҙегеҙгә ниндәйҙер бер маҡсат ҡуйғандан барлыҡҡа килдеме?**

**Азат Бадранов:** Маҡсат тураһындағы һөйләүгә күсер алдынан бер-нисә йыл элек булған һәм әле хәтергә төшкән бер ваҡиға тураһында һөйләп үтәйем әле. Башҡорт дәүләт университетының юридик факультетында уҡыған сағымда башҡорт йәштәренең осрашыуҙарын ҡалдырмаҫҡа тырыша торғайным. Улар төрлө йәмәғәт ойошмалары булдырғайны һәм был ойошмаларҙың күбеһененең маҡсаттары, минең ҡарамаҡҡа, изге һәм дөрөҫ булһа ла, уларҙың Дон Кихот кеүек, замана "ел тирмәндәре"нә ҡаршы көрәшеүе оҡшамаңы. Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы алдынан Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте бер төркөм йәштәргә Ҡоролтай эргәһендә Йәштәр ҡоролтайы төҙөргә тәҡдим итте. Йәштәрҙән бары тик ойошманың маҡсаттары һәм идеялары тураһында план төҙөү талап ителде. Финанс ярҙам, бина менән тәьмин итеү мәсьәләләрен Хөкүмәт вәкилдәре үҙ өҫтөнә алырға тейеш ине. Тик йәштәр беренсе көндән үк "Идарала кемдәр ултырасаҡ?", "Идараны кем етәкләйәсәк?" кеүек һорауҙар тирәһендә бәхәс ҡуптарып, ваҡытында ойоша, булған мөмкинлекте үҙ ҡулдарына ала алманы. Беҙ, "Мәскәү һәм Санкт-Петербургта уҡыусы башҡорт студенттары һәм аспиранттары берлеге" ағзалары, ғәҙәттә, төп проблемаларҙы һәм төп маҡсаттарҙы билдәләгәндән һуң ғына ошондайыраҡ һорауҙарҙы күтәрәбеҙ һәм ығы-зығыһыҙ ғына хәл итеп ҡуябыҙ. Алға ҡуйылған ҙур, хатта амбициялы маҡсатыбыҙ шул: "Башҡортостан Республикаһының кадрҙар потенциалын булдырайыҡ!", "Халҡыбыҙҙы берләштерәйек!"

Башҡорт кадрҙары ҡытлығы бер кемгә лә сер түгел. Шуға күрә лә беҙ башҡорт йәштәренә Мәскәү, Санкт-Петербург вуздарына уҡырға инергә, сит тарафта юғалып ҡалмаҫҡа, шәхес булараҡ үҫергә, профессиональ оҫталыҡты арттырырға ярҙам итәбеҙ. Йәштәрҙе юғары уҡыу йорттарына урынлаштырыуҙан, йәғни "атайҙарса" ҡурсалауҙан тыш, беҙ уларҙың үҙҙәрендә ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килтерергә тырышабыҙ.

Беҙҙең эш бының менән генә сикләнмәй - республика мәктәптәрендә белем алыусы уҡыусыларға киләсәк һөнәрҙәрен һайлашырға ла ярҙам итәбеҙ. Мәскәү, Санкт-Петербург университеттары вәкилдәрен саҡырып, уларҙы районлар мәктәптәре буйлап йөрөтәбеҙ. Был эште былтыр Әбйәлилдә башлағайныҡ, быйыл тағы бер-нисә көньяҡ-көнсығыш райондарында дауам итергә уйлайбыҙ. Йәй айҙарында Әбйәлил районы халҡы менән аралашыуҙарҙан күренеүенсә, ошо районда ғына ла Мәскәү вуздары тураһында хәҙер яҡшы беләләр. Ә биш йыл элек, беҙҙең эшмәкәрлек башланып ҡына торған ваҡытта, "Ниндәй Мәскәү вуздарын беләһегеҙ?" тип һорауға "Мәскәү дәүләт университетын" тигәндән башҡа яуап ишетеп булмай ине. Ә хәҙер иһә, беҙҙең менән хеҙмәттәшлек иткән К.Циолковский исемендәге Мәскәү авиация-техник институтын, Бауман исемендәге һәм башҡа университеттарҙы ауылдарҙа күптәр белә. Был иһә, үҙ сиратында, башҡорт балаларының сифатлы белем алыу мөмкинлеген бермә-бер арттыра. Хәҙерге көндә көньяҡ-көнсығыш районларының һәр ауылынан кәмендә бер студент Мәскәүҙә йә Санкт-Петербургта белем ала. Мәскәүҙә алған юғары белемдең үҙенсәлеге шунда: ил баш ҡалаһында дәүләт, бюджет юғары уҡыу йорттары бик күп һәм бик ныҡ профилләшкән. Медицина өлкәһендә, мәҫәлән, Өфөләге БДМУ-ла стоматологтарҙы бер факультет әҙерләһә, Мәскәүҙә хатта стоматология академияһы бар.

Дәүләттең үҙ өҫтөндә булған ижтимағи бурыстарын үтәүҙән баш тартҡан, йәғни ауылдарҙа мәктәптәрҙе оптималләштереүҙәр, юғары белем биреү даирәләрендә бюджет урындарын ҡыҫҡартыуҙар барған бөгөнгө көн - беҙҙең станция аша уҙып барыусы поезд кеүек. Беҙ бөтөн мөмкинлектәрҙе файҙаланып ҡалырға - йәштәребеҙҙе уҡытып, "уҙып барыусы поезға" ултыртып өлгөрөргә тейешбеҙ. Юғиһә, капиталистик система, баҙар иҡтисады һәм башҡалар ябай йәш кеше өсөн бөтөн ишектәрҙе лә бикләйәсәк. Күберәк йәштәребеҙҙе уҡытып ҡалмаһаҡ, халҡыбыҙ бик үк яҡшы киләсәк вәғәҙә итмәгән яңы иҡтисади мөнәсәбәттәр хөкөм һөргән заманда үҙ урынын ала алмаясаҡ. Түбәнгә тәгәрәмәҫ өсөн иң тәүҙә үҙ-үҙебеҙҙе формалаштырырға тырышырға кәрәк.

**▸ Һеҙҙең ярҙам менән бик күп йәштәр баш ҡаланың юғары уҡыу йорттарына уҡырға инде һәм уҡып йөрөй икәнен беләбеҙ. Әммә ул йәштәр, уҡыуҙы тамамлағас, республикаға ҡайтырмы һуң?**

**Азат Бадранов:** Өфөнөң ҡайһы бер юғары уҡыу йорттары вәкилдәре йыш ҡына беҙҙе республиканың абитуриенттарын "урлау"ҙа ғәйепләй. Беҙҙең эшкә ҡаршы көрәшергә кәрәк, тип дәртләнеүселәр ҙә бар. Был юҫыҡта һорауҙы икенсе төрлөрәк яңғыратырға кәрәктер. Абитуриенттар - крепостной крәҫтиәндәр түгел, улар ошо ерҙә тыуған икән, бында уҡырға тейеш, тип, ергә бәйләп ҡуйылмаған. Төп мәсьәлә уларҙың уҡырға ситкә китеү-китмәүендә түгел, ә власть әһелдәре тарафынан уларҙың ҡайтыуына тейешле шарттар тыуҙырылырмы, юҡмы - шунда. Күптән түгел РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева менән осрашҡайныҡ, ул беҙҙең профориентация эшендә административ ресурстар менән ярҙам итәсәген белдерҙе. БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың мәғариф мәсьәләләре буйынса комитеты рәйесе Эльвира Айытҡолова ла студенттар араһында ошо темаға һорау алыуҙар үткәрергә йыйыныуыбыҙҙы хупланы. Ошондай кимәлдә аңлаусылар күберәк булһа, беҙ тағы ла һөҙөмтәлерәк эшләр инек, моғайын.

Студенттарҙың республикаға ҡайтырға иҫәбе бармы, тигән һорау беҙҙе ныҡ борсой, әлбиттә. Яңыраҡ, ҡышҡы каникулдар ваҡытында, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында белем алыусы буласаҡ социологтар менән аралаштыҡ. Улар менән берлектә Мәскәүҙә уҡыусы студенттарыбыҙ араһында беҙҙе борсоған темалар буйынса һорау алыу үткәрергә килештек. Был эштең һөҙөмтәләре беҙҙең эште дөрөҫ аңларға теләмәгән иптәштәрҙең "ауыҙын ябыр", тип ышанам.

**Фатима Янбаева:** Мәскәүҙә уҡыусы студенттар менән ошондай һөйләшеүҙәр үткәреүебеҙ арҡаһында ла ҡайһы бер егеттәр һәм ҡыҙҙар беренсе курстан уҡ беҙгә ярҙам итергә теләге барлығын белдерә һәм: "Халҡыбыҙға нисек ярҙам итәйек икән?" - тигән һорауҙарын төбәй. Беҙ уларға яуап итеп: "Әлегә тырышып уҡығыҙ, яҡшы белгестәр булыуға өлгәшегеҙ, шуның менән республикаға ла, халҡыбыҙға ла ярҙам итерһегеҙ", - тибеҙ. Шулай уҡ Мәскәүҙә уҡыусы студенттар менән төрлө сараларҙан һуң нәҡ һеҙ биргән һорау тураһында әңгәмәләшә йөрөйбөҙ. Аралашып һөйләшкәндән һуң, әңгәмәселәребеҙҙең, самa менән әйткәндә, 60-70 проценты мотлаҡ республикаға ҡайтасағын белдерә. Ә инде махсус рәүештә һорау алыуҙар үткәрһәк, уның һөҙөмтәләре, моғайын, милләттәштәрҙең күңелен йылытыр әле, тип ышанам. Нисек кенә булмаһын, беҙ Мәскәүҙә белем алған йәштәребеҙҙе киләсәктә республиканың иң яҡшы кадрҙары сафына баҫырға, республикаға хеҙмәт итеүгә көйләйбеҙ. Беләм, уларҙың күптәре әле үк шуға әҙерләнә: үҙҙәренең университеттағы ғилми эштәрен, дипломдарын, диссертацияларын Башҡортостан темаһына арнай. Кемдер демография мәсьәләләрен өйрәнә, кемдер республикабыҙҙың инвестицион яҡтан өҫтөнлөгө темаһы менән ныҡлап ҡыҙыҡһына. Мин үҙем, мәҫәлән, ғилми эшемде Башҡортостан Республикаһының төбәк иҡтисадын өйрәнеүгә, уны башҡа өлкәләр менән сағыштырыуҙарға арнағанмын. Йәштәр үҙҙәре аласаҡ һөнәрҙәре күҙлегенән Башҡортостанды өйрәнә икән, тимәк, ҡайтыу яғын ҡарайҙар. Күптән түгел бер ҡыҙыбыҙ Башҡортостан ерлегендә тикшеренеүҙәр алып барып, иҡтисад буйынса кандидатлыҡ дисссертацияһы яҡланы. Был ғына ла түгел. Ситтә уҡыған, ситтә эшләгән кешеләр барыбер тыуған ергә икенсе күҙҙәр менән ҡарай, уны ҡәҙерләй башлай. Бөтәһе лә сағыштырыуҙарҙа беленә бит. Мәҫәлән, Башҡортостандағы һымаҡ рухи күтәренкелек Мәскәүҙә юҡ, башҡорттар араһындағы эскерһеҙлек, ихласлыҡты ла башҡа халыҡтар араһында осратмаҫһың. Минең үҙемә, мәҫәлән, ошондай рух, ихласлыҡ етешмәй Мәскәүҙә, йәштәребеҙ менән үҙ-ара аралашыу ғына ошо ҡытлыҡты бер аҙ тулыландыра кеүек.

Ҡайһы берәүҙәр, Башҡортостанға ситтән тороп та хеҙмәт итергә, Рәсәй һәм Ер шарының төрлө нөктәләрендә беҙҙең милләт, беҙҙең мәҙәниәт, беҙҙең республика тураһында белгертеп йәшәргә була бит, ти. Тик барыбер, "мейеләр" ҙур ҡалаларға китеп бөтһә, Башҡортостанда кем ҡала, тигән һорау ҡуйырға кәрәк үҙ алдыңа. Әллә ниндәй ҡәүемдәр Башҡортостаныбыҙға ағыла, уларҙы ниҙер ылыҡтыралыр бит инде беҙҙең төбәктә. Шуға ла беҙ Башҡортостаныбыҙға ҡайтып, һәр кем үҙенең өлкәһендә бына тигән белгестәр булып, республикабыҙға хеҙмәт итергә, тигән хыял менән янабыҙ.

**Азат Хәлиуллин:** Беҙҙең берлек бишенсе йыл ғына эшләй һәм быйыл уның тәүге сығарылыш йылы. Шуға ла һөҙөмтәне быйыл күрербеҙ инде. Егеттәрҙең күбеһе ҡайтасаҡ ул Башҡортостанға, әммә Башҡортостан уларҙы нисегерәк ҡабул итер - был хаҡта әйтеүе ауыр.

**▸ Һеҙҙең берлек тарафынан үткәрелгән саралар тураһында, ниндәй идеялар менән яныуығыҙ хаҡында ла әйтеп үтһәгеҙсе...**

**Азат Бадранов:** Беҙ институцион саралар үткәрәбеҙ, тип әйтһәк, маһайыу булмаҫтыр. Ысынлап та, беҙҙең командабыҙ ойошҡан рәүештә эшләй. Һуңғы берике йыл эсендә егеттәр һәм ҡыҙҙар үҫте, эшләргә, ойошторорға өйрәнде, ысын мәғәнәһендә команда барлыҡҡа килде.

**Фатима Янбаева:** Мәскәүҙә Нәзир Байегетов тигән шәп егет тырышлығы менән беренсе тапҡыр "Алтын Ай" бейеүселәр ансамбле төҙөлдө. Беҙҙең бер генә сара ла улар ҡатнашлығынан тыш үтмәй. Ансамбль шундай тиҙлек менән камиллаша. Быйыл улар йыл башында Өфө тамашасылары ал-

*Дәүләттең үҙ өҫтөндә булған ижтимағи бурыстарын үтәүҙән баш тартҡан, йәғни ауылдарҙа мәктәптәрҙе оптималләштереүҙәр, юғары белем биреү даирәләрендә бюджет урындарын ҡыҫҡартыуҙар барған бөгөнгө көн - беҙҙең станция аша уҙып барыусы поезд кеүек. Беҙ бөтөн мөмкинлектәрҙе файҙаланып ҡалырға - йәштәребеҙҙе уҡытып, "уҙып барыусы поезға" ултыртып өлгөрөргә тейешбеҙ. Юғиһә, капиталистик система, баҙар иҡтисады һәм башҡалар ябай йәш кеше өсөн бөтөн ишектәрҙе лә бикләйәсәк. Күберәк йәштәребеҙҙе уҡытып ҡалмаһаҡ, халҡыбыҙ бик үк яҡшы киләсәк вәғәҙә итмәгән яңы иҡтисади мөнәсәбәттәр хөкөм һөргән заманда үҙ урынын ала алмаясаҡ. Түбәнгә тәгәрәмәҫ өсөн иң тәүҙә үҙ-үҙебеҙҙе формалаштырырға тырышырға кәрәк.*

дында сығыш яһаны, "Байыҡ" телевизион конкурсында ҡатнашырға саҡырыу алды. Шулай уҡ Мәскәүҙә беренсе тапҡыр "Һылыуҡай" башҡорт һылыуҙары конкурсы, башҡорт телендә КВН уйындары үткәреү ҙә оло ваҡиға һымаҡ ҡабул ителде. Беҙҙең "Һылыуҡай" конкурсында еңгән Камила Бикҡолова республика кимәлендә үткән "Һылыуҡай"ҙа ҡатнаша, ә беҙҙең КВН уйынында ҡатнашып, 4 команда араһынан еңеүсе тип танылған "Хәйnation" командаһы Өфөлә үткән Башҡорт асыҡ КВН Лигаһында уңышлы сығыштары менән ҡыуандыра. Апрель айында Мәскәүҙең Тверь майҙанында Рәсәй композиторҙар союзы менән берлектә композитор Салауат Низаметдинов иҫтәлегенә арналған башҡорт йыры фестивале үткәрергә йыйынабыҙ.

**Азат Бадранов:** Хәҙер Мәскәүҙә үҙ тамашасыбыҙ бар, улар беҙҙән яңынан-яңы саралар үткәреүебеҙҙе һорай. Ә бындай саралар Мәскәүҙә башҡорт телен, башҡорт мәҙәниәтен пропагандаларға, үҫтерергә ярҙам итә. Киләсәктә башҡорт теле дәрестәре ойошторорға тигән ниәтебеҙ ҙә бар. Әле был дәрестәрҙе ниндәй методика ярҙамында ойошторорға, тигән һорау өҫтөндә баш вата-

тыра һала. Эшләгән эште күрһәтә лә беләбеҙ, тип әйтмәксемен.

**Азат Бадранов:** 2013 йылда беҙҙең студенттарҙы ла ҡурайҙа уйнарға өйрәтеүен һорап, Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Айытҡоловты Мәскәүгә саҡырғайныҡ. Азат ағай бер аҙна буйы Мәскәүҙәге Башҡортостан вәкиллегендә йәшәп, бер төркөм башҡорт егеттәренә ҡурайҙа уйнау техникаһын өйрәтте. Ошо хаҡта ишетеп, Силәбеләге, Төмән ҡалаларындағы милләттәштәр ҙә олуғ ҡурайсыны үҙҙәренә саҡырып алды. Әйткәндәй, Азат ағай шәп идеяһы менән уртаҡлашып китте: "Мәскәүҙәге ҡурайсыларығыҙҙы Өфөгә Ҡурайсылар союзы үткәргән сараларға килтерһәгеҙ, сараның дәрәжәһе

дың, милләтемдең үҫешенә булышлыҡ итергә тигән хыялымдың һөҙөмтәһелер, тип уйлайым. Мин Мәскәүгә ҡыҙыҡ эҙләп китмәнем. Унда ҙурыраҡ, тәрәнерәк белем бирәләр икәнен, унда кешеләр аңына ыңғай тәьҫир итә, уны үҫтерә торған күп шарттар, уңайлыҡтар барлығын тоя инем. Тойомлауым раҫҡа сыҡты, тип уйлайым хәҙер. Был ҙур ҡалала беҙ, провинциянан йыйылған йәштәр, бер яҡлы фекер йөрөтөүҙән, төрлө сикләүҙәрҙән арынабыҙ. Башҡа төбәк, башҡа менталитеттағы кешеләр менән аралашып, улар араһында үҙебеҙҙе лә лайыҡлы итеп күрһәтергә өйрәнеп, беҙ үҙебеҙҙе шәхес булараҡ та, башҡорт милләте вәкиле булараҡ та раҫлайбыҙ, яҡты ки-

гә, беҙҙең эшкә ҡушылырға теләп мөрәжәғәт итә. Беҙ уларға тәүҙә: "Ә һеҙҙең ассоциация эшенә ҡарата ниндәй тәҡдимдәрегеҙ бар?" - тигән һорау бирәбеҙ. Улар бик күп тәҡдимдәре, идеялары менән уртаҡлаша. Беҙ ризалашабыҙ һәм уларға үҙҙәренең идеяларын тормошҡа ашырыу өсөн ваҡыт билдәләп, ошо ваҡыт эсендә ниндәй һөҙөмтә булырын көтәбеҙ. Ваҡыт үткәс ҡараһаҡ, йыш ҡына тәҡдим итеүсе тарафынан бер ни ҙә эшләнмәгән була. Ул саҡта теге ағай йә апай менән яғымлы ғына хушлашырға тура килә. Кеше ниндәй генә йәштә булмаһын, йәмғиәттә уны нисек кенә ихтирам итмәһендәр, һөйләгән һүҙе менән эше тап килмәй икән, беҙ ундайҙар менән эшләмәйбеҙ.

нән "ысын ир-егет" булып ҡайтҡан кеүек, донъяла, республикала, Рәсәйҙә ниндәй процестар барыуы тураһында хәбәрҙар йәштәр тәрбиәләү өсөн сит мөхиттә сыныҡыу үтеүҙең файҙаһы ҙур, минеңсә. Йәш кеше теләһә ҡайһы хәлдән үҙе сыға белергә тейеш. Республикала, мәҫәлән, проблемаларҙы атай-әсәй, туғандар хәл итешә ала. Уҡыуҙа "ҡойроҡ"тар килеп сыҡты икән, һинең танышыңдың танышы декан менән таныш булыуы ла мөмкин, хәлдә "ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ" яҡшырта ала. Шунан килеп сыға ла инде беҙҙең булдыҡһыҙ хеҙмәткәрҙәр, етәкселәр, түрәләр... Ә ситтә бер кем дә һине ҡурсалап йөрөй алмай, тәүҙән үк үҙең өсөн яуаплылыҡ барлыҡҡа килә. Бындай мөхит үҙе оло тәрбиәсе ул.

**▸ Һуңғы ваҡытта "модернизация" тигән һүҙ йыш ҡулланыла. Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев та йыш телгә ала был һүҙҙе. Ғәҙәттә, модернизация һүҙен төрлө өлкәләрҙә ҡулланалар. Ә һеҙ "милләтте модернизациялау" тигән һүҙҙе нисек аңлатырһығыҙ?**

**Азат Бадранов:** Йәһүд халҡында белем алыу - иң беренсе урында тора. Ул - традиция, ҡанун һәм мотлаҡ башҡарыла торған ғәмәл. Был халыҡ вәкилдәре балаларына сәңгелдәктән алып, иң мөһиме - белем, тип өйрәтә. Ә беҙҙә, шул уҡ беҙҙең быуын йәштәре миҫалынан сығып ҡарағанда ла, белемгә ынтылыу юҡ, ынтылышыбыҙ бары тик диплом алыуға ғына ҡайтып ҡала. Йыш ҡына берәй атай кешегә: "Әйҙәгеҙ, ағай, улығыҙҙы Мәскәүгә уҡырға урынлаштырайыҡ", - тиһәм, яуапҡа: "Юҡ, юҡ, ул үҙебеҙҙә уҡыясаҡ. Улым әле бесәндә йөрөй, башҡа шылтыратмаһағыҙ ҙа була", - тигән яуап ишетергә тура килә. Бына ниндәй ҡиммәттәргә өҫтөнлөк бирә халҡыбыҙ. Был күренешкә ҡаршы нисек көрәшергә? Әле мин белмәйем. Мәскәүгә, йәки Питерға уҡыу мөмкинлеге сығып торғанда, уны ҡулдан ысҡындырырға ярамағанлығын аңлатыуы ауыр икәнен күреп, аптырауымдың сиге булмай. Беҙ үҙебеҙҙең эш алымдары, принциптары тураһында ла ентекләп һөйләйбеҙ, һәр нәмәгә шикләнеп ҡарағандарға юғары уҡыу йорттарында эшләүсе ҡабул итеү комиссияларына шылтыратып, беҙҙең турала беләләрме, юҡмы икәнлекте һорарға ҡушабыҙ. Шылтыратыусылар ҙа табыла. Ә бына кире реакция башланыуы мине бөтөнләй аптыратты. "Һеҙ бушлай уҡырға инергә тәҡдим итәһегеҙ икән, тиккә түгелдер - ул вуздар яҡшы белем бирмәйҙер улай булғас", - тине ҡайһы берәүҙәр...

Йәһүдтәр, әрмәндәр балаларын нисек итеп тәрбиәләй, тиһегеҙ? Бер эшкә тотонғанһың икән, ул эшеңдең яртыһы һин уйлағанса килеп сыҡмаған хәлдә лә, уны аҙағынаса еткер, тиҙәр. Беҙҙә нисек? Берәй эшҡыуар эш аса ла, беренсе көрсөккә килеп төртөлгәс тә: "Эшҡыуарлыҡ - минең өлкә түгел икән", - ти һала. Йәки, берәй студент уҡырға килә лә, артта ҡала башлаһа, уҡыуын ташлап ҡайта ла килә. Халҡыбыҙ ныҡышмаллыҡты, эште аҙағынаса еткереүҙе лә бер ҡағиҙә итеп алһын өсөн ни эшләргә?

**(Дауамы 10-сы биттә).**



# ЫНТЫЛЫШТЫ... итәйек!

быҙ. Юғиһә, Силәбе, Екатеринбург өлкәләрендә ошо эшкә тотонған милләттәштәрҙең башҡорт телен юғары уҡыу йорттары студенттары, уҡытыусылар өсөн тәғәйенләнгән әсбаптар аша өйрәнеүен күреү бер аҙ аптырау тыуҙырҙы. Һис һүҙһеҙ, был китаптарҙы үҙләштереүе ауыр. Шуға ла беҙ, бәлки, был дәрестәр виртуаль донъяла ойошторолор, тип уйлайбыҙ. Кеше интернетҡа инеп, берәй видео-яҙманы асып, күпмелер ваҡыт материал менән танышып сыҡһын да, артабан үҙ эше менән булһын, тибеҙ.

**Азат Хәлиуллин:** Мин дә грамматика өйрәнеүгә ҡарағанда, йәнле аралашыу яғында. Тәжрибә лә шуны күрһәтә бит: әгәр башҡорт телен белмәгән берәй баланы башҡорт балалар баҡсаһына йөрөтһәң, бала ике-өс айҙан туған телендә һөйләшә лә башлай.

**Фатима Янбаева:** Беҙ үткәргән бөтә саралар башҡорт телен, мәҙәниәтен, башҡорт донъяһын популярлаштырыуы менән дә, Мәскәүҙәге башҡорттарҙың, йәштәрҙең әүҙем тормош алып барыуын күрһәтеүе менән дә әһәмиәтле. Бөтә был саралар тураһында республика халҡы ла хәбәрҙар хәҙер, сөнки БСТ-ның Мәскәүҙәге хәбәрсеһе Гөлназ Ғәлимуллина һәр сарабыҙҙа ҡатнашып, уны үҙенең репортаждарында яҡтырта, хәбәрселәребеҙ беҙҙең осрашыуҙар, конкурстар тураһындағы мәғлүмәттәрҙе интернет селтәренә лә, "Башинформ" порталына ла урынлаш-

бермә-бер үҫәсәк, идеологик йәһәттән дә был көслө алым буласаҡ", - тине. Ысынлап та, беҙҙең ҡатнашлыҡ булһа, республика конкурстары бөтә Рәсәй конкурсы бейеклегенә күтәрелә бит.

Мәскәү - ул йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ижад, фән донъяһы кешеләре тупланған үҙәк булараҡ, бик уңайлы ҡала. Беҙҙең "Дискурс" тип аталған дискуссиялар клубы-

ләсәгебеҙ тураһындағы хыялыбыҙҙы барлыҡҡа килтерәбеҙ, уның тормошҡа ашыуы өсөн ниндәй эштәр эшләргә кәрәк икәнлеген билдәләйбеҙ. Тап ошо йәштәр Башҡортостандың киләсәген билдәләр, башҡорт халҡының интеллигенция үҙәген барлыҡҡа килтерер, тип уйлайым.

**Азат Бадранов:** Фатиманың фекере менән килешеп, "синэнергетик эффект" тип аталған күренеш тураһында телгә алып үтке килә. Ике-икең дүрттән күп, иң кәмендә биш була, тигәнде

**▸ Башҡорт театр донъяһының элитаһы - 70-80 йәшлек актерҙар бөтөнөһө бергә Мәскәүҙә уҡыған. Бөгөн улар шул ваҡыттарҙы иҫкә алып, хәтеркитаптар, йылъяҙмалар яҙа. Улар Башҡорт академия драма театрын Мәскәүҙә ойошторған, тиһәк тә, хата булмаҫ. Алла бирһә, Башҡортостан Республикаһының киләсәген дә тап һеҙ яҙырһығыҙ, тип ышанғы килә...**

**Азат Бадранов:** Рәхмәт! Беҙгә хәҙер стеротиптарҙы, ҡалыплаш-

***Беҙҙең ассоциация ағзаларының бер ҡағиҙәһе бар: беҙ кешеләрҙе эше буйынса баһалайбыҙ. Һуңғы ваҡытта беҙгә Мәскәүҙән дә, Башҡортостандан да күп кенә өлкән йәштәге милләттәш ағай-апайҙар ярҙам итергә, беҙҙең эшкә ҡушылырға теләп мөрәжәғәт итә. Беҙ уларға тәүҙә: "Ә һеҙҙең ассоциация эшенә ҡарата ниндәй тәҡдимдәрегеҙ бар?" - тигән һорау бирәбеҙ. Улар бик күп тәҡдимдәре, идеялары менән уртаҡлаша. Беҙ ризалашабыҙ һәм уларға үҙҙәренең идеяларын тормошҡа ашырыу өсөн ваҡыт билдәләп, ошо ваҡыт эсендә ниндәй һөҙөмтә булырын көтәбеҙ. Ваҡыт үткәс ҡараһаҡ, йыш ҡына тәҡдим итеүсе тарафынан бер ни ҙә эшләнмәгән була. Ул саҡта теге ағай йә апай менән яғымлы ғына хушлашырға тура килә. Кеше ниндәй генә йәштә булмаһын, йәмғиәттә уны нисек кенә ихтирам итмәһендәр, һөйләгән һүҙе менән эше тап килмәй икән, беҙ ундайҙар менән эшләмәйбеҙ.***

на ла бик күп шәхестәрҙе саҡырып, студенттарҙы борсоған һорауҙар буйынса әңгәмәләр уҙғарабыҙ. Мәҫәлән, журналист Максим Шевченко, яҙыусы Кара-Мурза, профессор Бари Гилс, Кагарлицкий кеүек сәйәсмәндәр, ғалимдар менән ҡыҙыҡлы осрашыуҙар үткәрҙек.

**▸ Ҙур нәмәләр алыҫтан күренә, тиҙәр. Ә һеҙ республикабыҙҙы 10-20 йылдан ниндәй итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**Фатима Янбаева:** Үҙемдең Мәскәү ҡалаһында уҡыуымды мин ошо хаҡтағы уйланыуҙарымдың, йәғни республикам-

аңлата был эффект. Беҙҙең берләшмәнең биш йыллыҡ эш һөҙөмтәһе буйынса ҡарағанда, Башҡортостандан килгән меңдән ашыу йәш кеше күп сығымдар түкмәй генә юғары белем алыу юлында. Командабыҙҙа 20 йәшлек студенттар ғына. Шулай ҙа улар үҙҙәренең илһөйәр, рухлы, аңлы булыуҙары арҡаһында ҙур эштәр башҡара, ҙур маҡсаттар ҡуя белә. Беҙҙең ассоциация ағзаларының бер ҡағиҙәһе бар: беҙ кешеләрҙе эше буйынса баһалайбыҙ. Һуңғы ваҡытта беҙгә Мәскәүҙән дә, Башҡортостандан да күп кенә өлкән йәштәге милләттәш ағай-апайҙар ярҙам итер-

ҡан фекерҙәрҙе үҙгәртеү ҡиммәт. Минеңсә, башҡорт халҡы кисергән бөгөнгө проблемаларҙың күбеһе аңдарҙағы көрсөк арҡаһында килеп сыға. Минең һүҙҙәрҙе күптәр оҡшатмаҫ. Әммә беҙҙе тормош ошо хәлгә төшөргән икән, унан сығыу юлдарын бергәләп эҙләргә, проблемалар тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләшергә ваҡыттыр бит инде. Бөгөнгө хәлгә ҡалыуыбыҙҙа үҙебеҙ генә ғәйепле, тип уйлау ҙа дөрөҫ булмаҫ ине, әлбиттә. Йәштәр ошо хәлде аңлаһын өсөн, бәлки, уларҙы ситкә уҡырға ебәреп, сит мөхит ярҙамында тәрбиәләп алыу яҡшығалыр? Егеттәр әрме-

✓ *Мәскәү һине үҙаллы булырға, үҙеңде яҡларға, үҙ йөгөңдө үҙең күтәреп барырға мәжбүр иткән ҙур бер донъя. Ә Өфөлә йылы, унда һин ҡурсаулы, яҡлаулы, унда һин бер аҙ көсөргәнештән арынып, ял итеп ала алаһың.*



**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Бына ниндәй һорау борсой мине. Беҙҙең эргәлә йөрөгән, беҙҙең менән аралашҡан мең кешенең бер өлөшө ошо уңыш ҡаҙаныу һабаҡтарын отоп алһа, ул да яҡшы. Университеттар ятаҡтарына урынлаштырған ваҡытта беҙҙән: "Һеҙҙекеләрҙе бөтөнөһөн бер ҡатҡа урынлыштырайыҡмы?"- тип һорайҙар. Беҙ: "Юҡ, һәр береһен төрлө милләт кешеләре, төрлө республикалар, өлкәләр вәкилдәре араһына урынлаштырығыҙ, аралашһындар бүтәндәр менән дә", - тип яуаплайбыҙ. Мәҫәлән, Ильяс исемле Ишембай егете Мәскәү Тау университетына уҡырға ингән тәүге йылда бик баҫалҡы ғына ине. Уны йәһүд егете менән бер бүлмәгә урынлаштырғандар. Бер йыл үттеме, юҡмы, егетебеҙ үҙ алдына инглиз телен өйрәнә, төрлө сараларҙа, конференцияларҙа ҡатнаша башланы. Бер йылдан республикаға ҡайтҡайны, тегенең теле-телгә йоҡмай, малай! Хәҙер ул төрлө компанияларҙа эшләй, стажировкалар үтә - барыһына ла өлгөрә. Тағы, Ғәзиз Рәжәпов исемле егет тә сит илдәрҙә булды, унда стажировкалар үтте. Владивосток ҡалаһында ун студентыбыҙ уҡый, уларҙан бер егет Япония грантына лайыҡ булды.

**Азат Хәлиуллин:** Бөгөн беҙҙең берлек шөғөлләнгән эш - үҙе лә милләттең модернизацияһы ул, минеңсә. Йәштәрҙең яҡшы белем алыуы, күп кешеләр менән аралашыуы - халҡыбыҙҙың белемлелек сифатын үҫтерә. Тимәк, алға китеш тә буласаҡ.

**Фатима Янбаева:** Милләтте модернизациялау - ул милләтте яңы дәрәжәгә күтәреү, тип аңлайым. Яңы заман менән бергә яңы ҡанундар барлыҡҡа килде, ләкин халҡыбыҙ яңы ҡанундарға бик аҡрын яраҡлаша, ҡайһы саҡта уларҙы ҡабул да итмәй. Ләкин ҡабул итмәй сарабыҙ юҡ шул. Шуға ла халҡыбыҙға был турала аңғартырға, яңы заман геройҙары өлгөләрен таратырға кәрәк. Беҙ бына шул эшкә өлөш индерер быуын булырбыҙ, тип ышанам. Унан һуң, беҙ үҙебеҙҙе, республикабыҙҙы белгертә, тиңдәр араһында тиң итеп раҫлай ҙа йөрөргә тейешбеҙ. Туғандаш халыҡты алайыҡ. Улар шул тиклем әүҙемдәр, Рәсәй телевизион проекттарында ла, башҡа урындарҙа ла ҡатнашып, үҙҙәрен ишеттереп кенә торалар. Ә беҙҙе күптәр белмәй. Бер ваҡыт бер курсташым шундай һорауы менән аптыратты: "Ғәфү ит һорауым өсөн, ә һеҙҙең Өфөлә сауҙа үҙәктәре, метро, аэропорт бармы?" Ҡаҙанда Универсиада үткәс, ундағы йәшәү кимәле тураһында халыҡ хәбәрҙар хәҙер. Ә беҙҙең республикабыҙ, Өфөбөҙ тураһында күптәр белмәй, ниндәйҙер бер артта ҡалған, ҡырағай төбәк һымаҡ күҙ алдына килтерә. Ярай, бынығы ваҡыты менән хәл ителер мәсьәләләр, хәҙер республикала туризмды үҫтереү, төрлө инвестицилар йәлеп итеү тураһында күп һөйләнелә. Ә бына мине ситтәр генә түгел, үҙебеҙ ҙә үҙебеҙҙе белеп бөтөрмәүебеҙ бигерәк тә борсой. Тарихыбыҙҙы, телебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы етерлек кимәлдә белһәк, милли үҙаң күпкә юғарыраҡ кимәлдә булыр ине. Бөгөнгө шарттарҙа иң яҡшыһы - телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы, йолаларыбыҙҙы, милли үҙенсәлегебеҙҙе һаҡлап, заман ҡуйған талап-ҡанундарға ла яраҡлашып йәшәү. Тик халҡыбыҙ ялҡаулыҡты, вайымһыҙлыҡты милли үҙенсәлек менән бутамаһын ине. Милли үҙенсәлектәребеҙ беҙҙең икенсе.

▸ **Һеҙҙән милләтте модернизациялау тураһында ни өсөн һорауыбыҙ тураһында аңлатып үтәйек. Зыялы башҡорт егеттәре кәләшлеккә гел сит милләт ҡыҙҙарын ала, ә ҡыҙҙар - сит милләт егеттәренә кейәүгә сыға. Был хәүеф, ысынлап та, бар. Бөтөн яҡтан үҫкән, аңын үҙгәрткән башҡорттар сит милләт вәкиленә оҡшай башлай һәм ул кешеләр барыбер беҙҙеке булмай түгелме?**

**Азат Бадранов:** Мин кем тураһында һүҙ барыуын аңлайым. Эйе, ундайҙар бар. Моғайын, һәр милләттең бындай кешеләре барҙыр. Шулай ҙа, беҙҙә был күренеш нығ таралған, тип әйтеп булмай. Ғөмүмән, беҙ үткәргән сараларҙа танышҡан егеттәр һәм ҡыҙҙар үҙ-ара ғаилә ҡоралар. Яңыраҡ Илшат Рәхмәтуллин атлы егетебеҙ үҙебеҙҙең Сибай ҡыҙына өйләнде, Регина Баймөхәмәтова исемле ҡыҙыбыҙ Рөстәм исемле егетебеҙ менән сәстәрен сәскә бәйләне. Бындай миҫалдарыбыҙ күп. Йәғни, йәштәр аралаша, дуҫлаша. Тиҙҙән ғаиләләребеҙ тағы ла артыр, тип уйлайым. Әйткәндәй, мин дә үҙебеҙҙең башҡорт ҡыҙына өйләндем, былтыр туйыбыҙ булды.

*Ильяс исемле Ишембай егете Мәскәү Тау университетына уҡырға ингән тәүге йылда бик баҫалҡы ғына ине. Уны йәһүд егете менән бер бүлмәгә урынлаштырғандар. Бер йыл үттеме, юҡмы, егетебеҙ үҙ алдына инглиз телен өйрәнә, төрлө сараларҙа, конференцияларҙа ҡатнаша башланы. Бер йылдан республикаға ҡайтҡайны, тегенең теле-телгә йоҡмай, малай! Хәҙер ул төрлө компанияларҙа эшләй, стажировкалар үтә - барыһына ла өлгөрә. Тағы, Ғәзиз Рәжәпов исемле егет тә сит илдәрҙә булды, унда стажировкалар үтте. Владивосток ҡалаһында ун студентыбыҙ уҡый, уларҙан бер егет Япония грантына лайыҡ булды.*

**Азат Хәлиуллин:** Миңә лә башҡорт ҡыҙҙары ғына оҡшай. Сит милләт ҡыҙҙарын, ғөмүмән, ҡабул итә алмайым.

▸ **Мәскәүҙә йәшәп, уҡып, үҙ милләтегеҙҙең ниндәй ыңғай һәм кире яҡтарын белдегеҙ?**

**Азат Хәлиуллин:** Бала сағымдан Өфөлә йәшәнем. Йәғни, мин интернатта ла, дөйөм ятаҡта ла йәшәгәнем юҡ ине: ябай ҡала малайымын. Халҡыбыҙҙы Өфөлә түгел, ә Мәскәүҙә аңлай башланым, тиһәм дә хата булмаç. Мәскәүҙә дөйөм ятаҡта үҙебеҙҙең егеттәр менән йәшәйем. Барыһы ла яҡшы, тик әлегә мин аңлап, ҡабул итеп бөтә алмаған күренештәр ҙә бар. Мәҫәлән, беҙҙең егеттәрҙең бергә йыйылып, бөгөн кем нимә эшләүе тураһында хәбәрләшеүе минең өсөн ят булды. "Ауылдарҙа шулай итәләрме икән?" тип уйлап ҡуйыуым хәтеремдә. Башҡорт егеттәре һәр ваҡыт бергә генә йөрөй, бер-береһе менән нығыраҡ, күберәк аралаша. Бүтәндәр менән аралаша һалып, араларына алып бармайҙар. Башҡалар менән аралашыу манераһы ла үҙенсәлекле, тип әйтергә була. Бына шулай, милләтемдең ҡайһы бер холҡон мин Мәскәүҙә өйрәнәм.

**Фатима Янбаева:** Мин дә Өфөлә үҫтем, аралашҡан кешеләрем гел үҙебеҙҙең милләттән булды, башҡорт мәктәбендә, башҡорт балалары менән уҡыным. Шулай ҙа Мәскәүгә барғас, башҡортлоҡ - ул туғанлыҡ, яҡынлыҡ икәнен яҡшыраҡ аңлай башланым. Әлбиттә, йәштәребеҙҙең төрлөһө бар, бик яҡшылары ла, ҡайһы бер насар ҡылыҡлылары ла. Ләкин мин уларҙы барыбер яҡын күрәм. Башҡа милләт йәштәре менән аралаша алмайым. Үҙ милләтем кешеләрен генә үҙемә яҡынлата алам. Мәскәүгә уҡырға килмәç борон мин улай үҙебеҙҙекеләрҙең дә һәр кеме менән аралаша алмай инем. Ә Мәскәүҙә һәр башҡорт миңә туған һымаҡ, һәр кеме менән еңел генә һөйләшеп китәм, сөнки был аралашыуҙың тәрбиәүи һөҙөмтәһе барлығын аңлайым. Әңгәмәселәремдең хаталарын төртөп күрһәтә һалып бармайым, ә һүҙ ыңғайында ипләп кенә, һылап-һыйпап ҡына, уны үҙем дөрөҫ тип иҫәпләгән йүнәлешкә көйләйем. Беренсе, икенсе курс студентары мине апай тип, үҙҙәренә таяныс, ҡурсалаусы итеп ҡабул итә.

**Азат Бадранов:** Эйе, йәштәребеҙҙе дөрөҫ юлға әйҙәү менән беҙҙең ассоциация ағзалары әүҙем шөғөлләнә. Йәғни, беҙ милләтте модернизациялау өҫтөндә лә эшләйбеҙ, милләтебеҙҙең ҡайһы бер һыҙаттарын үҫтерергә, ә ҡайһыларын үҙгәртергә теләйбеҙ. Башҡортостандың, халҡыбыҙҙың киләсәге ниндәй булыры бары беҙҙән, башҡорттарҙан ғына тора. Фатима бик дөрөҫ әйтте: беҙ уның менән егеттәрҙе, ҡыҙҙарҙы яҡшы яҡҡа үҙгәртергә тырышабыҙ. "Йомшаҡ көс" теорияһы буйынса эш итһәң, теләһә кемде яҡшы яҡҡа үҙгәртә алаһың. Был теория буйынса кешегә: "Һин шулай итмә, былай итмә!" - тип бойорорға ярамай, ә йомшаҡ ҡына итеп әүҙем эшкә илһамландырырға кәрәк. Кеше әүҙем эш ваҡыттында ғына үҙгәрә.

▸ **Мәскәү менән Өфө араһында айырма һиҙелерлекме?**

**Фатима Янбаева:** Ҙур ҡалала һығылмалыҡ, сыҙамлыҡ, үҙаллылыҡ тәрбиәләнә, минеңсә. Һин үҙ алдыңа бер маҡсат ҡуйғанһың икән, тимәк, һин барыбер шул маҡсатыңа бер тайпылыуһыҙ барырға тейешһең. Бында һине артыңдан төртөп, етәкләп алып барыусы юҡ. Йә уңаһың, йә туңаһың, тигәндәй. Шул яҡтан ҡарағанда, Мәскәү һине үҙаллы булырға, үҙеңде яҡларға, үҙ йөгөңдө үҙең күтәреп барырға мәжбүр иткән ҙур бер донъя. Ә Өфөлә йылы, унда һин ҡурсаулы, яҡлаулы, унда һин бер аҙ көсөргәнештән арынып, ял итеп ала алаһың. Шулай итеп, минең өсөн был ике ҡала - ике донъя инде ул. Ысынлап та, улар араһында айырмалар бар. Мәҫәлән, Мәскәү халҡының берәүҙә лә эше юҡ, барыһы ла үҙ эше менән мәшғүл, үҙ уйҙарына сумған. Ә Өфөләге халыҡ бер нимәгә лә битараф түгел, урамдан үткәндә лә, ҡыҙыҡһынып, бер-береһенең күҙҙәренә текләйҙәр, йылмаялар. Моғайын, башҡорттоң ихласлығы йөҙәр йылдар буйы уның йәнәшәһендә йәшәгән башҡа халыҡтарға ла йоҡҡандыр ул...

▸ **Өфөлә һыуыҡ көндә урамда туңдырма ашап барыу - баш ҡала халҡына хас күренеш. Ә Мәскәүҙең романтикаһы нимәлә?**

**Азат Хәлиуллин:** Мәскәүҙең романтикаһы - уның Рәсәйҙең баш ҡалаһы булыуында, минеңсә. Тағы миңә әле йоҡоға талмаған төнгө Мәскәү урамдары оҡшай - әкиәт кеүек, күңелгә әллә ниндәй билдәһеҙ хистәр килеп тулыша.

**Фатима Янбаева:** Мәскәү - ҙур ауыл ул. Әллә нисәмә километрҙарға һуҙылған метрола йыш ҡына таныштар менән осрашаһың. Минең өсөн Мәскәү ҡалаһының романтикаһы - ошондай сит-ят донъяла көтмәгәндә үҙебеҙҙекеләр менән осрашыу, күрешеү, аралашыу ул. Ошо сит-ят донъяла башҡорт телен, башҡорт йырҙарын яңғыратҡан саралар үткәреү ҙә - романтика. Сараларҙы мөмкинлектәр шул тиклем аҙ булған ерҙә үткәреүебеҙ ҙә сәмләндерә торған бер романтика. Мәскәү, үҙегеҙ беләһегеҙ, уҫал ҡала. Ошо мөхиттә яҡташтарҙы, милләттәштәрҙе осраштырған шәп сара үткәрәбеҙ икән, унда ҡатнашыусыларҙың күңеле була, йөҙө яҡтыра икән - был да беҙҙе күккә күтәрә торған романтика. Бына шулай, тыуған ҡалам Өфөлә әллә ни әһәмиәте булмаған бөтөн был хәл-ваҡиғалар Мәскәүҙә, әлбиттә, оло әһәмиәткә эйә һәм ул тотош бер романтиканы, йән тантанаһын, рух күтәренкелеген хасил итә.

**Азат Бадранов:** Эйе, Мәскәү ҙә тыуған ауыл һымаҡ үҙенә тарта. Ундағы тормош тиҙлегенә өйрәнеп алһаң, артабан ул һиңә бер ниндәй ҙә уңайһыҙлыҡ тыуҙырмай. Мәскәүгә бер-ике көнгә конференцияға, йә бүтән сараға килеүселәрҙән: "Йә, Мәскәү нисек?" - тип һораһаң, уларҙан: "Кешеләр шул тиклем уҫал ҡарашлы, барыһы ла ҡайҙалыр ашыға", - тигән яуапты йыш ишетергә була. Өс көн эсендә ҡаланы аңлап бөтөп булмай. Кешеләр уҫал түгел, уларға барыбер: улар һине бөгөн күрҙе, башҡа бер тапҡыр ҙа осратмаясаҡ. Һәр кем үҙ мәшәҡәтенә, үҙ уйҙарына сумған. Руль артында ипле йөрөүгә килгәндә, Мәскәүҙә машинала йөрөүе еңелерәк: водителдәр бер-береһенә юл бирә, һәр хәлдә, мотлаҡ рәүештә йәйәүлеләрҙе үткәреп ебәрә. Ни өсөн шулай? Сөнки унда алама ғына "Шестерка" машинаһында, кем белә, бәлки, берәй ҙур түрәнең атаһы китеп баралыр, йәки берәй ҡоралды кеше ултыралыр. Ошо ҡурҡыныстың барлығы бөтәһен дә юлда ипле йөрөргә күнектергән. Мәскәүҙең романтикаһы тағы ниҙә, тип һораһағыҙ, уның мөмкинлектәр ҡалаһы булыуында. Бында алдыңа маҡсат ҡуйһаң, теләгән кеше менән осрашырға була. Һәр осрашыу яҙмышында ниндәйҙер роль уйнауы бар. Мәскәү - бәйләнештәр, аҡса һәм мөмкинлектәр ҡалаһы.

**Фатима Янбаева:** Тик шуныһы йәл: күптәр был мөмкинлектәрҙе күрмәй һәм файҙаланмай.

**Азат Хәлиуллин:** Мәскәү мине юҡ-барға көйәләнмәҫкә, урамда һиңә төртөлөп, тейеп үткән үткенселәргә иғтибар итмәҫкә өйрәтте. Хәҙер мин үҙем дә кешегә юлда аңғармаҫтан ҡағылһам, әһәмиәт бирмәйем; миңә кемдер нимәлер әйтһә, шунда уҡ иҫем китмәй генә яуабын да ҡайтарам.

▸ **Ҡытайҙар, Урта Азия халыҡтары сит ерҙә лә ауыл-ауыл булып йәшәй. Йәнә, терһәк психологияһы тигән төшөнсә бар. Мәскәүҙә ошондай "башҡорт ауылын" булдырып булыр ине тип уйлайһығыҙмы?**

**Фатима Янбаева:** Ул ауыл былай ҙа бар. Азат та әйтте бит, беҙҙең егеттәр тик үҙ-ара ғына аралаша, тип. Йәштәребеҙ тырымтырағай йөрөмәһен, бер-береһе тирәһендә берләшһен, сит йоғонтоларға эйәреп китмәһен өсөн ойошторолған да инде беҙҙең ассоциация ла. Бергә йыйылып алһаҡ, Мәскәү урамдарын да, Ҡыҙыл майҙанды ла үҙебеҙҙең бәләкәй генә бер башҡорт ауылына әйләндерәбеҙ, ҡурайҙа уйнайбыҙ, башҡортса йырҙар йырлайбыҙ. Былтыр, мәҫәлән, Ҡыҙыл майҙанға сығып, күмәкләп Рәми Ғарипов шиғырҙарын ҡысҡырып уҡыныҡ. Республика көнөндә трамвайҙа сәйәхәт итеп, пассажирҙар иғтибарына Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәр тәҡдим иттек, сығыштарыбыҙ ҡурай моңона үрелеп барҙы.

**Азат Бадранов:** Яңы йыл каникулдары алдынан Мәскәүҙә Көнсығышты өйрәнеү институтында "Альтаир" фондын етәкләүсе йәштәр менән эшләүсе лезгин егете Руслан Ҡорбанов менән осрашҡайным. Ул миңә үҙҙәренең фондтары тураһында һөйләне, беҙҙең ассоциацияның эшмәкәрлеге менән дә ҡыҙыҡһынды. Ахырҙа: "Мин үҙебеҙҙең эш тәжрибәһе менән уртаҡлашырға ниәтләнгәйнем, ул эштәрҙе һеҙ атҡарып та ҡуйғанһығыҙ икән", - тине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө һөйләшеүҙә ҡатнашыусылар ҡайһы бер күптәнге һорауҙарға яңыса яуап бирҙе һымаҡ. Һәр хәлдә, беҙ үҙебеҙҙе борсоған бик күп мәсьәләләргә яуап таптыҡ. Әлбиттә, беҙ, Өфөлә йәшәүселәр, Мәскәүҙә йәшәүсе милләттәштәр психологияһын тулыһынса аңлап та етмәйбеҙҙер. Әммә барыбер, йәмғиәт - һәр ерҙә лә йәмғиәт инде ул. Айырма тик шунда ғына: улар бер-береһенең күҙендәге осҡондо тотоп алып, ялҡын итеп дөрләтә белә, шуныһы менән бәхетлеләр ҙә.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**
**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

✓ *Әнүәр Шафиҡов үҙенең мәҡәләһендә "Тәпән" исемле ҡатын-ҡыҙҙар бейеүендәге тәре һүрәтенә аптыраған. Әммә тәпәндә тәре түгел, башҡорт халыҡ тамғаһы - ҡойошҡан төшөрөлгән.*



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ҮҘЛЕГЕНДЕ ҺАҠЛАУ ҘА...

## мәҙәнилек

**"Киске Өфө"лә башҡорт бейеүе буйынса мәҡәләләр баҫылып тора. Әле күптән түгел Әнүәр Шафиҡов та "Башҡорт бейеүен боҙмайыҡ!" тигән саҡырыу ташланы. Уның әйткәндәре лә, әле мин әйтәсәк ҡайһы бер фекерҙәр ҙә беҙҙең барлыҡ бейеү коллективтарына ла ҡағыла. Уны шулай уҡ "Байыҡ" бейеү конкурсында ҡатнашыусылар һәм ҡатнашасаҡ оҫталар ҙа ҡолағына киртеп ҡуйһа ине.**

Рәссам-скульптор булараҡ, халҡыбыҙҙың бейеү сәнғәтен күптәндән күҙәтеп барам һәм ул минең ижадыма ла ҙур йоғонто яһай. Дөрөҫ ҡуйылған, дөрөҫ башҡарылған бейеүҙәр халҡыбыҙҙың рухын тойорға, һаҡларға ярҙам итә, ғорурлыҡ тойғоһо уята.

Башҡорт халыҡ бейеүҙәре бик үҙенсәлекле, бай булған кеүек үк, уның мөһим элементы булған милли кейемдәребеҙ ҙә бик үҙенсәлекле һәм күп төрлө. Шуға күрә лә, һәр бер бейеүгә тәғәйенләп тегелгән кейемдәргә лә иғтибарлы булырға кәрәк. Сөнки ҡайһы бер бейеүҙәрҙә халҡыбыҙ өсөн ят, традицион булмаған деталдәрҙе күреп, күңел ҡырыла. Мәҫәлән, еләнгә нескә ҡулдарҙы тағы ла нескәртеп, һылаштырып тегелгән еңдәр башҡорт кейемдәренә тап килмәгән күренеш. Әлеге лә баяғы, Кавказ халыҡтары кейемдәрен хәтерләтә ул.

Ҡайһы саҡта ир-егеттәр еләненең арҡа яғына, ҡалаҡ һөйәге тапҡырына ҡыҙҙарҙың ҡашмау ҡойроҡтарындағы биҙәктәрҙе сигеп ҡуялар, былдай биҙәкләү иһә ир-егеттәрҙең егетлеген юя һымаҡ. Башҡорт бейеүендә бит яурындарын һелкетеп, ҡалаҡ һөйәген уйнатып бейеүе ир-егеттең беҙҙең халҡыбыҙға ғына хас сифаттарын да төҫмөрләтә! Ә уның еләнендәге баяғы биҙәктәр күҙ ҡарашын урлай. Тамашасы күҙҙәрен берсә ҡыҙҙарҙың ҡашмауына, берсә егеттәрҙең арҡаһындағы биҙәктәргә күсерә һәм тамашаны бер бөтөн итеп ҡарай алмай. Шулай итеп, урынһыҙ ҡулланылған һәр бер биҙәк матурлыҡ була алмай, киреһен эшләй башлай.



Әнүәр Шафиҡов үҙенең мәҡәләһендә "Тәпән" исемле ҡатын-ҡыҙҙар бейеүендәге тәре һүрәтенә аптыраған. Әммә тәпәндә тәре түгел, башҡорт халыҡ тамғаһы - ҡойошҡан төшөрөлгән. Уның саманан тыш ҙур булыуы, төҫтәрҙең контраст ҡулланылыуы арҡаһында биҙәк кейемдән айырылып, күҙгә нық ташланып тора, шуға ла ул Әнүәр Шафиҡовты аптыратҡандыр.

Буянғандың буяуы матур, буянмағандың йөҙө матур, тигәндәй, кейемдәге төҫтәр буйынса ла күңелде борсоған мәлдәр күп. Йыраҡтан күренһен типмелер, сәхнә кейемдәрендә артыҡ сағыу төҫтәр ҡулланыу менән мауығыу китте. Беҙҙең халҡыбыҙ шул тиклем тотанаҡлы, тыйнаҡ, баҫалҡы, әҙәпле. Ошо сифаттар быуаттар буйы уның көнкүрешендә, кейемдәрендә сағылыш тапҡан. Төҫтәр иһә тәбиғәттән алынған. Ҡыҙыл төҫ икән - көнгөрт ҡыҙыл, бешкән сейә төҫөндәгерәген, йәшел төҫ икән - ап-асыҡ, ҡысҡырып торған йәшел түгел, тәбиғәттең үҙе кеүеген, ҡатмарлыраҡ төҫтәрен үҙ иткәндәр.

Сәхнәлә артыҡ сағыу ғына түгел, киреһенсә, артыҡ тоноҡ төҫтәрҙе лә күрергә мөмкин. Миҫал өсөн "Байыҡ" телевизион бейеү конкурсында ҡатнашҡан Әбйәлил районынан килгән егет һәм ҡыҙҙың кейемен алайыҡ. Улар үтә тоноҡ зәңгәр, хатта ҡол төҫөнә яҡын камзулдарҙа, егет ҡыҫҡа ҡуныслы итектә, тәпәш кейеҙ ҡалпаҡта (барыһы ла сонтоҡ) бейенеләр. Был төҫтәр ҙә халҡыбыҙға хас түгел. Бейеү хәрәкәттәре лә ят булып, ирекһеҙҙән мари бейеүен хәтерләтте.

Тағы. Елән салғыйының бер яғын билбауға ҡыҫтырып бейеү күренешен дә ҡайһы бер осраҡта биҙәк менән генә, заманса күрһәтә башланылар, эште еңеләйттеләр.

Был етешһеҙлектәр нилектән килеп сыға һуң? Сәхнә кейеме тегеүселәр, күрәһең, билдәле белгестәр, этнографтар менән кәңәшләшеү тигәнде онотто. Бейеү сәнғәтеме, йыр сәнғәтеме, башҡа йүнәлеш булһынмы- профессионалдар менән кәңәш-төңәш итеү, оло, урта быуын вәкилдәре менән әҙмә-әҙлекле быуындар бәйләнеше, күсәгилешлек булдырыу зарур. Ошонда күренә лә инде үҙ традицияларыбыҙға ҡарата һаҡсыл ҡараш, ошо була инде үҙлегеңде һаҡлау һәм мәҙәнилек! Шуға күрә лә бейеү һәм йыр сәнғәтебеҙ оҫталарын үҙҙәре иҫән саҡта мөмкин тиклем эҙләп, уларҙан өйрәнеп, өлгө алып, түкмәй-сәсмәй йәш быуынға, киләсәккә еткерергә бурыслыбыҙ икәнде онотмайыҡсәле.

**Әлфәт ҠОБАҒОШОВ,**
**скульптор.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




## ӘБЙӘЛИЛ МӘҘӘКТӘРЕ

### Ҡаҡаҡ

Элегерәк урыҫ менән аралашмаған ауыл халҡы, урыҫса нисек һупалай, шулай һөйләшкән. Бәҙри еңгә лә көҙ баҙарға ҡаҙ һатырға барғас: "Ҡаҡаҡ бери, ҡаҡаҡ", - тип ҡысҡыра икән. Килеп тауарын ҡарап китеүселәргә: "Жариный ҡаҡа, һимеҙ", - тип тә ебәрә. Жариный тигәне өтөлгән тигәнде аңлата икән. Кешеләр көлөшә, еңгәнең унда эше юҡ, ҡаҡаҡлай ғына. Һәр кем үҙ тауарын белгән һүҙҙәре менән маҡтай шул. Әле лә ҡаҙ өмәләрендә уны иҫләп, көлөшәләр.

### Носки

Былары инде ике йәш ҡыҙ менән булған ваҡиға. Улар ҡала баҙарына һарыҡ йөнө һатырға барған. Йөндәре сүпле, бесән вағы менән тулған икән, ундай ерен йәшереп, йомшаҡ өлөшөн генә ҡабартып һалғандар. Үҙҙәре: "Носки купите, носки", - тип һөрәнләйҙәр, ти. Килеп ҡараусылар носки юҡҡа аптырай: "Будет носки, ширыс купи", - тиҙәр. Шулай көскә сүпле йөндәрен һатып, оялып та, ҡурҡып та, ҡайтыу яғына һыпырталар. Нимә генә эшләһәң дә, ялған төрткөләй бит ул.

### "Гуры малы"

Ауылда гел өйсөләп, ул-был хәбәрҙе таратыусы, "Гуры малы" тигән ҡушаматлы Гәйниямал инәй булды.

- Бибисара горот киткән икән, гуры малы ине, Бәширәнең ҡыҙы тыуған, гуры малы ине, Ғәбдрәшит үтеп киткән, гуры малы ине...- тип, һүҙе һайын ҡуллана ине "гуры малы"ны.

Ауыл халҡы "гуры малы"ның әтнәкәһен саҡ систе. Ҡалала ҡыҙында булғанда шул һүҙҙе отҡан икән инәй. Ҡыҙының күршеһе "горя мало" тип һөйләнгән булған. Әле ауылда берәй хәл булһа, "гуры малы" тип көлөшәләр. Аңын-тоңон белмәгән һүҙҙе һөйләмәү хәйерле лә бит, инәй күп белем, тип уйлағандыр инде.

### "Хаккый уйнаныҡ"

Ауылда исемде боҙоп әйтеү ғәҙәти хәл. Гөлфайза - Колпас, Хафаза - Хапаза, Бибиниса - Бибес һ.б. Фаҡиһа апай ҙа был ғәҙәттән ситтә ҡалмаған, бөтәһе лә уны Хаҡый тип йөрөтә. Апайҙың 11-12 йәшлек улы ла бар. Ҡыш малайҙар боҙҙа хоккей уйнайҙар. Аяҡҡулы туңып, малай ҡискә генә ҡайтып инә. Апай уны дәресен әҙерләмәгән өсөн әрләй башлай. Малай әсәһенә: "Хаккый уйнаныҡ, беҙ еңдек", - тип һөйләп маташҡан була. Апай үҙен әләкләгәндәр икән, тип уйлап, малайҙы һыҙырып ташлай. Яҡшылап аңлатҡас ҡына Фаҡиһа апай көлөп ебәрә. Хоккей ҡарағанда шул мәлде иҫкә төшөрөп алабыҙ. Тел ни, тыҙә, һүҙҙе нисек беләһең, шулай һупалайһың.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

### Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә

Бынан бер нисә йыл элек кешеләр эш-йомошон атҡарыр өсөн бал әсетеп, ҡунаҡ саҡырышыр булып китте. Бер ваҡыт, имеш, бал ҡойғандарҙы тикшерәләр, штраф һалалар икән, тигән хәбәр таралды. Беҙҙең күрше Хәдимә апай ҙа утын килтертергә тип бер фләгә бал ҡойған булған. Бер көндө әҙәм аяғы һил булғас, ейәнсәре менән йөкларға ятҡас, соланда дөһөр-шатыр килеп берәү йөрөй икән. Хәдимә апай: "Тор, Ғәлиә, вәкилдәр тикшерергә килде", - тип ҡыҙын уята, ти. Ә соланда уның һайын дөһөрләйҙәр, ти. Тик йортҡа инеүсе юҡ. Аптырағас, Хәдимә апай ҡыҙы менән бергәләп күтәреп, фләгәне ишек төбөнә сығарып ултырта. "Мә, эс йә түк, тик беҙгә генә теймә", - тип ялына икән Хәдимә апай. Соландағылар уның һайын дөбөр-шатыр килә. Өләсәй менән ейәнсәр төнө буйы йоҡламай ултырып, таң аттыра. Ә иртәнсәк ипләп кенә ишекте асһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, башына быяла банка кейгән бесәй үрле-ҡырлы һикерә, ти. Хужабикә ишекте асыуға бесәй башындағы банкаһы менән урамға сығып олаға. Ул банкала ҡаймаҡ булған була, шуны ашайым тиеп башын тыҡҡандыр инде, мәхлүк. Иртәнсәк ҡатындар көтөүгә һыйыр ҡыуырға сыҡһалар, Хәдимә апайҙың өйө тәңгәлендәге бағанала башына банка кейгән бесәй ултыра, ти. Үҙе банканан үтә ҡарап мыяулай икән. Шулай инде, тамаҡ тамуҡҡа төшөрә, тип юҡҡа әйтмәгәндәр бит.

### Сысҡанға үлем, бесәйгә көлкө

Һуғыштан һуң тол ҡатындарҙың, әбейҙәрҙең өйҙәре тәпәш кенә була торғайны. Ҡыйыҡ юҡ, тәҙрә ярыҡ булһа, яҫтыҡ тығып ҡуйырҙар ине. Ә шуҡ малайҙар өлгөләге яҫтыҡты эскә төртөп төшөрөп, өй алдында ятҡан кәзәләрҙең башын тәҙрәгә ҡыҫтап тығып баҡырталар икән. Берәүҙәре кәзәнең ҡойроғон бора, ти, ә кәзә уның һайын ныҒыраҡ баҡыра. Ә теге бахыр әбейҙәр уяулы-йоҡоло килеш ни эшләргә белмәй, ҡоттары осоп, һөрән һалып ҡысҡыралар, ти.

Ул ваҡытта бәләкәй генә ситән өйҙәрҙә йәшәй торғайнылар. Бала-саға шаяртырға теләп, өй башына менеп, мөрйәнә ябып ҡуйырҙар ине. Һеҙөмтәлә өй эсе төтөн менән тула. Ә өйҙәгеләр ни эшләргә белмәй сыр-сыу киләләр, ти. Ә теге малайҙар шунан ҡыҙыҡ табып, эстәре ҡатҡансы көлөп, тамаша ҡылалар икән.

Сысҡанға үлем, бесәйгә көлкө инде.

**Л.МОСТАФИНА,**
**Әбйәлил районы**
**Рыҫҡужа ауылы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# МӨХӘББӘТ ТОЙҒОҺО...
## һәм йөрәк сирҙәре

■ Миссури университеты (АҠШ) тикшеренеүселәре билдәләүенсә, кешенең нимәнелер тиҙ онотоп барыуы яҡшы кәйефкә бәйле булыуы ихтимал. Баҡтиһәң, күптәр яңы ғына ишеткән мәғлүмәтте хәтеренә төшөрә алмай. Белгестәр раҫлауынса, яҡшы кәйефтә булған саҡта баш мейеһенең хәтерләү һәләттәре түбәнәйә, ә насар кәйефле булған мәлдә мейе яҡшыраҡ эшләй. "Яңы ғына булған һөйләшеүҙең төрлө нескәлектәрен мейелә кире тергеҙә алыу һәләте эшсе хәтер тип атала. Ә ял иткәндә, кәйеф ныҡ юғары булғанда кешенең был хәтере лә йышыраҡ "ял итә", - ти белгестәр. Был ыңғай тойғоларҙың хәтерҙең хәтерләү механизмдары эшмәкәрлегенә кире тәьҫир итеүен раҫлаусы беренсе асыш. Әммә был яҡшы кәйефтә булыу насар тигәнде аңлатмай, ти ғалимдар, бындай саҡта кешенең эшкә ижади ҡарау һәләттәре көсәйә, шулай уҡ фекерләүҙең башҡа аспекттары яҡшыра.

■ Никахта оҙаҡ йәшәүсе һәм бер-береһен һәр ваҡытта ла хуплап тороусы парҙар араһында йөрәк ауырыуҙары һирәгерәк осрай. Ғөмүмән, мөхәббәттең йәшәү урыны итеп йөрәк күптән билдәләп ҡуйылған. Ә медицина хеҙмәткәрҙәре йөрәк һәм ҡан тамырҙарын һөйөү тойғоһо менән нисек бәйләй һуң? Мәҫәлән, күп тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ғаилә тормошо ир-егеттәрҙең ғүмерен оҙайтыу һәләтенә эйә. Солт-Лейк-Ситилағы Юта университеты (АҠШ) тикшеренеүселәре 136 өйләнешкән парҙы тикшереп, ошо һорауҙарға яуап эҙләгән. Ҡатнашыусыларҙың уртаса йәше 36 йәш булған. Уларҙы ике төркөмгә бүлгәндәр. Тәүгеһендә икенсе яртыһын тик ыңғай баһалаусылар, икенсеһендә уларҙың ыңғай һәм кире яҡтары сиратлашып тороуын раҫлаусылар йыйылған. Тормош иптәше менән ҡайһы берҙә ҡәнәғәт, ҡайһы берҙә ҡәнәғәт булмаусыларҙың компьютер томографияһында ҡан тамырҙарына кальций ултырыуы асыҡланған. Был - ҡан тамырҙарында атеросклеротик төйөрсәләр барлыҡҡа килеүе билдәһе, һөҙөмтәлә ҡан тамырҙары стеналары насар һуҙыла һәм яйлап өҙөлөүе ихтимал. Кальций йөрәкте туҡландырыусы коронар ҡан тамырҙарына ултырһа, ул насар эшләй башлай, гипертония барлыҡҡа килә. Психолог Берт Учио аңлатыуынса, иренең йә ҡатынының ярҙамын, хуплауын тоймаған кешеләрҙә яңғыҙлыҡ тойғоһо уяна, ул вербаль агрессияға йәки өмөтһеҙлөккә килтерә. Стрестан йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ҡаҡшай. Бындай күңелһеҙлек килеп сыҡмаһын өсөн бер-берегеҙҙе маҡтап өйрәнегеҙ, ти ғалимдар. Шул саҡта йөрәк тә сәләмәт буласаҡ.

■ Брокколи һәм кәбеҫтәнең башҡа төрҙәрен күп ҡулланыу ҡалҡан биҙе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһай. Брокколи йәшелсәләр араһында файҙалы сифаттары буйынса лидер иҫәпләнә. Уның составындағы антиоксиданттар төрлө шештәрҙе, мәҫәлән, күкрәк яман шешен булдырмай. Был сифаттар башҡа йәшел төҫлө йәшелсәләрҙә - Кале кәбеҫтәһендә, салатта бар. Тик уларҙы йыш ҡулланыу ҡалҡан биҙенең гипофункцияһына килтереүе бар. Гипофункция йәки гипотиреоз ваҡытында организмға ҡалҡан биҙе гормондары етешмәй, ә ул өлкәндәрҙә матдәләр алышыныуы, ә үҫмерҙәрҙә үҫеү һәм енси өлгөрөү өсөн яуап бирә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Дүрт тиҫтә йыл самаһы хеҙмәт стажы булған, әлеге көндә 49-сы поликлиникала участка терапевы булып эшләгән һаулыҡ һаҡлау отличнигы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған табибы Рәфиә Фазыл ҡыҙы БУРАНБАЕВА менән терапия, сәләмәтлек һәм медицинала күҙәтелгән ҡайһы бер күренештәр, халыҡты борсоған һорауҙар тураһында һөйләшәбеҙ.**



# АНТЫН АҠСАҒА АЛМАШТЫРМАҺА...
## шул инде ысын табип!

**➔ Терапевҡа ниндәй сирҙәр менән мөрәжәғәт итергә була?**

Терапия - ул һаулыҡ һаҡлау системаһының киң таралған бер өлөшө. Иғтибар итһәгеҙ, бөгөн терапияның төрлө алымдары бар - психотерапия, арттерапия, энә ҡаҙау терапияһы, үлән менән дауалау терапияһы һ.б. Әгәр шундай сағыштырыу урынлы булһа, терапевт - ул юл сатындағы хәрәкәтте көйләп тороусы кеүек. Ҡарайбыҙ, тыңлайбыҙ, анализдар тапшырырға ҡушабыҙ. Йәғни терапевҡа һыуыҡ алдырғанда, киҫкен респиратор-вирус ауырыуҙары булғанда, ҡурылдай һәм үпкә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре, хроник талсығыу, ашҡаҙан-эсәк тракты ауырыуҙары, умыртҡа һөйәге һәм арҡа, быуындар сирҙәре, бөйөр эшмәкәрлеге, неврологик проблемалар, матдәләр алмашыныуы боҙолоуы, ҡан ауырыуҙары менән мөрәжәғәт итәләр. Әммә ауырыу менән гел генә сирҙәр тураһында ла һөйләшеп булмай, ҡыйын булғанда ла, шатлыҡтары ташып түгелеп торғанда ла беҙгә киләләр. Уйлап ҡараһаң, дауаханаға килеүсенең һәр ҡайһыһы стресс хәлендә бит. Шуға, ниндәй генә һорау менән мөрәжәғәт итһәләр ҙә, һәр кемде тынысландырыу, кәңәштәр биреү - беҙҙең бурыс. Шуға, терапевт -ул психолог та, социолог та, юрист та тиергә була.

**➔ Әле киҙеү таралған осор. Ауырыуҙар барыһы ла табиптарға мөрәжәғәт итмәй, ҡайһы берәүҙәр үҙ аллы дауаланыуға өҫтөнлөк бирә. Үҙ аллы дауаланыу йәки сирҙе аяҡ өҫтө үткәреү ниндәй эҙемтәләр менән янай?**

Әҙ генә тымау һиҙгәндә, тән һыҙлағанда, мускулдар, тамаҡ ауыртҡанда, баш шаулағанда, танау менән тын ала алмай башлағанда сирлегә өйҙә ҡалырға тәҡдим итәм. Вирус йылыны яратмай. Өйҙә йылы юрған аҫтында, баллап сәй, һөт, һут эсеп кенә ятырға кәрәк. Урамға сығып йәки ҡаһарманлыҡ күрһәтеп эшкә йөрөгәндә иһә, үҙегеҙ сирләүегеҙ етмәгән, әллә күпме кешегә сир йоҡтораһығыҙ, вирус таратаһығыҙ. Ә инде өйҙә тороп, табип ҡушҡандарҙы теүәл үтәгәндә, өс көндән хәлегеҙ еңеләйеп, ауырыу ваҡыты ҡыҫҡарасаҡ. Сирҙе аяҡ өҫтө үткәргәндә уның эҙемтәһе булараҡ гайморит, синусит, пневмония барлыҡҡа килеүе мөмкин. Былтыр, мәҫәлән, балалар араһында үпкәләре шешеүселәр һаны ҡырҡа артты. Ә иң мөһиме - сирләмәҫ өсөн йыл әйләнәһенә иҫкәртеү саралары атҡарыу, витаминдар эсеү зарур. Мин витаминдарҙың үҙебеҙҙә етештерелгәндәренә өҫтөнлөк бирәм. Сөнки улар тикшереү үткән, беҙҙең мөхиткә яраҡлаштырылған, төбәктә ниндәй микроэлементтар етешмәй, шулар менән байытылған. Шулай уҡ йоҡоға ныҡ иғтибар бүлергә кәрәк. Бер үк ваҡытта йоҡларға ятып, хатта ял көндәрендә лә бер үк ваҡытта уянырға, торорға кәрәк. Режим боҙолорға тейеш түгел. Туҡланыу ҙа мөһим роль уйнай. Миҙгел буйынса кейенмәү ҙә үҙенең мәкерле эшен яйлап ҡына башҡара. Шулай уҡ хәрәкәтләнмәү ҙә организмдың эшмәкәрлегенә тотҡарлыҡ яһай. Шуға күрә, күберәк хәрәкәтләнергә, йәйәү йөрөргә кәрәк. Бөгөн илле аҙым атланығыҙ икән, иртәгә 100-гә еткерегеҙ, көн һайын шулай 50-гә арттыра барығыҙ.

**➔ Рәсәй Хөкүмәте бынан бер нисә йыл элек медицинаны ла өҫтөнлөклө милли йүнәлеш иҫәбенә индерҙе. Әммә ошо өҫтөнлөклө проект буйынса эшмәкәрлек алып барылыуға, дауалау учреждениелары заманса ҡорамалдар менән бушлай тәьмин ителеүгә ҡарамаҫтан, медицина нисектер түләүлегә әйләнә бара һымаҡ...**

Өҫтөнлөклө милли проект буйынса ҡиммәтле аппаратуралар бушлай бирелә һәм уларҙа тикшереү бушлай үткәрелә. Бына, мәҫәлән, беҙҙең поликлиникаға флюорография ҡоролмаһы алдылар. Элек плеврит булған осраҡтарҙа диагноз ҡуйыу ҡыйыныраҡ, пациенттың хәл-торошо аңлайышһыҙыраҡ була торғайны. Хәҙер ошо аппарат ярҙамында дөрөҫ диагноз ҡуйыу күпкә еңелләште.

Һуңғы ваҡытта халыҡ араһында магнит-резонанс томографияһы, компьютер томографияһы үтеү ҙә түләүле, тигән фекер ишетергә тура килә. Бында шуны әйтеп китер инем: бындай аппаратура ниндәйҙер поликлиникала юҡ икән, улар булған дауаханалар менән килешеү төҙөп, пациенттарға шунда йүнәлтмә бирелә. Йүнәлтмә буйынса, әлбиттә, сират бар, әммә иң оҙағы - бер-ике аҙна. Йүнәлтмәгә ҡасан ҡабул итеү датаһы, ваҡытына тиклем күрһәтелә. Ә инде ашығыс осраҡтар булһа, бындай тикшереүҙәрҙе шунда уҡ эшләйҙәр. Шулай уҡ хәҙер бигерәк тә ауыл халҡы араһында: "Эй, ул дауаханаға барҙың ни ҙә барманың ни, яҡшылап дауалаһындар тиһәң, түләргә кәрәк", - тигәнерәк һүҙҙәрҙе лә ишетергә тура килә. Ауыл ерендә "йүкә телефон" шәп эшләй, берәйһенән ишетеп ҡалһалар, шунда уҡ ҡабартып, арттырып һөйләйҙәр. Ғөмүмән, ауыл ерҙәренән, райондарҙан йүнәлтмә менән килеүселәргә медицина хеҙмәтләндереүе бушлай күрһәтелә. Ләкин кемдер көтөп торорға теләмәйенсә, тиҙ генә тикшереү үтергә, дауаланырға, операция яһатырға теләй икән, улар өсөн альтернатив рәүештә түләүле хеҙмәттәр ҙә бар. Әммә мин ауырыуҙарҙан аҡса алыуҙы, медицинаны түләүле итеүҙе аңламайым да, аңларға ла теләмәйем һәм был бер ниндәй әхлаҡ нормаларына ла һыймай, тип иҫәпләйем.

**➔ Совет осоронда белем алған табиптар намыҫлы, уларға һәләтте Аллаһы Тәғәлә биргән, тиҙәр. Хәҙерге йәштәрҙә элекке табиптарҙа булған энтузиазм бик һиҙелмәй. Медик булараҡ, йәш коллегаларығыҙҙың эше һәм белеме менән ҡәнәғәтһегеҙме?**

Бик ауыр, йөрәкте тетрәткес һорау һәм мәсьәлә. Ысынлап та, хәүефле заманда йәшәйбеҙ. Медуниверситет студенттарының белем алырға тырышмауына аптырайым. Әллә күңелдәре ятмай, әллә ата-әсәләренең теләге буйынса ғына ошо уҡыу йортона баралармы икән? Ҡайһы берҙәре эш ваҡытында иғтибарын ауырыуға түгел, икенсе нәмәләргә, ситкә йүнәлтә, эш урынында артыҡ бер минутҡа ла тотҡарланмайҙар. Табип булып эшләр өсөн кешене яратырға, кешенең күңелен аңлай, уның проблемаларын, сирен үҙеңдекеләй ҡабул итә белергә кәрәк. Табип - ул ауырыу менән бергә тын алырға, бер һулышта булырға тейеш. Әлбиттә, йәштәрҙең барыһы ла насар тип әйтә алмайым, эшен яратып башҡарғандары ла, белемлеләре лә бар. Әммә араларында осраҡлы килеп эләккәндәре лә бихисап.

**➔ Ғөмүмән, медицинаның киләсәген нисек күҙаллайһығыҙ?**

- Киләсәктә генә түгел, һәр заманда ла медицина профилактика йүнәлешендә булырға, табиптар иһә ауырыуҙы дауалауға ҡарағанда, уны булдырмау өҫтөндә эшләргә тейеш. Әммә бының өсөн ваҡытыбыҙ ҡалмай. Айына ни бары 4 сәғәт кенә профилактика эштәре өсөн бүленә. Мин студенттар менән эшләгәс, уларға һаулыҡты һаҡлауҙың зарурлығы тураһында һөйләп-һөйләп, 100 кешенең 5-6-һы ҡолағына элһә лә, бик шатмын. Бик йыш телевидениенан, радионан сығыш яһарға тура килә. Ләкин беҙ биргән мөһим мәғлүмәт кешенең бер ҡолағынан инә лә, икенсеһенән сыға. Әгәр һәр кем беҙҙең сығыштарҙы тыңлағандан һуң уйланып, үҙенең сәләмәтлегенә иғтибарлы була башлаһа, милләтебеҙ күпкә сәләмәтерәк булыр ине. Дауалау медиктар өсөн икенсе урында торорға тейеш. Ә беҙ хәл-тороштан сығып, уны беренсе урынға ҡуябыҙ. Шуға күрә мин һаман да профилактика медицинаһы барлыҡҡа килеүен өмөтләнеп көтәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер ваҡыт бер дин әһеле вәғәз тыңларға килеүселәргә вәғәз һөйләгән. Уның фәһемле һүҙҙәрен тыңлап, ҡәнәғәт булған халыҡ икенсе тапҡыр ҡасан килергә кәрәклеген белешкән. Диндар уларға ваҡытын әйткән. Икенсе ваҡыт йыйылып килгәс, шул уҡ дин әһеле шул уҡ вәғәзен ҡабатлап һөйләгән. Бер нисә тапҡыр шундай хәл ҡабатланғас, берәү түҙмәгән: "Килгән һайын бер нәмәне һөйләйһегеҙ, инде ятлап бөттөк, икенсе нәмәләр тураһында һөйләгеҙ", - тип ҡәнәғәтһеҙлек белдергән. "Ярай, - тигән дин әһеле. - Әгәр арағыҙҙа мин һөйләгәндәрҙе теүәл үтәгән бер генә кеше табылһа, мин икенсе нәмәләр тураһында һөйләргә риза". Ләкин дин әһеленең әйткәндәрен үтәүсе бер генә кеше лә табылмаған...**

**Медиктар менән аралашҡанда ла шул хәҡиҡәт өҫкә сыға: табиптарҙың биргән кәңәштәре "ике-икең дүрт" булған кеүек һәр ҡайһыбыҙға мәғлүм булһа ла, ниңәлер, уларҙы үтәргә ашыҡмайбыҙ, ә уларҙың икенсе кәңәш биреүен көтәбеҙ. Бәлки, ысынлап та, уларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, сәләмәтлегебеҙ өсөн яуаплылыҡты үҙебеҙгә алырға кәрәктер?**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

✓ *Рәхәтлек Аллаһы Тәғәлә тарафынан яратылған илаһи һәм ләззәтле бер тойғо ул. Раббыбыҙ уны итәғәтле, иманлы ҡолдарына йәннәттә бүләк ителәсәк бер тойғоларҙан иткән. Ләкин кеше был донъяла уҡ йәннәт көҫәй.*



ӘЙҘӘГЕҘ...

# ФАНИ ДОНЪЯЛА УҠ...

## йәннәт көҫәмәйек

**Ауыл осондағы ҡупым ғына итеп эшләнгән, ләкин хужаһыҙ тороуы сәбәпле ҡотон юғалтҡан йорт йәнә бер тапҡыр донъяның фанилығы хаҡында иҫкәртә. Әйтерһең дә, хыялдарығыҙға ҡарағанда, һеҙҙең әжәлегеҙ яҡыныраҡ, тигәнгә ишаралай.**

Егерме йыллап ҡына төҙөлгәндер был йорт. Мәктәпкә бармағайным әле. Ағайымдарҙың өйөн күтәргән саҡта яңы күршеләре ошо йорттоң бураһын алып килеп ултыртҡайны. Ҡалала эшләгән хужаһының ваҡыты булмаһымы, әллә 90-сы йылдарҙағы матди ауырлыҡтар арҡаһындамы, бура күтәрелмәйенсә ултыра бирҙе, һуңынан бөтөнләй эшлектән сыҡты. Тора-бара ике ҡатлы итеп ниәтләнгән йорттоң беренсе ҡатын ғына эшләргә ҡарар иттеләр, буғай. Хужа кешенең хаҡлы ялға сығырға ваҡыты яҡынайған һайын, төҙөлөштөң дә тиҙлеге артты һәм бына тынысһыҙ ҡала тормошонан ауыл һиллеген үҙ иткән ағайҙың йорто әҙер ҙә булды. Ләкин тәҡдир тигәне кешенең хыялдары, пландары менән иҫәпләшеп тормай шул. Ике ай ҙа йәшәп өлгөрмәне ауылда был ағай: йәмле йәй көндәренең береһендә теге донъяға күсте. Хужаһыҙ тороп ҡалған йорт та яйлап үҙенең ҡотон юғалтты.

Ауылға ҡайтҡанда ошо йорт алдынан йыш үтергә тура килә. Күптәр йәшәргә ризалашыр был йорттоң тоноҡ тәҙрәләренә, әҙәм балаһы яҡынаймаған ҡапҡаһына ҡараһам, кешеләргә хас бер һыҙат хаҡында уйҙар биләй башты. Ул да булһа, йән, күңел тыныслығынан килгән рәхәтлек тойғоһо. Ошо тойғоно татыр өсөн кеше аң белгәндән алып һуңғы тын алышына тиклем иллюзиялар ҡора, бына-бына уға өлгәшермен, тип, үҙен яңынан-яңы ялған хистәр менән урата. Был ағай ҙа, бәлки, пенсияға сыҡҡас, ҡаланың бысраҡ һауаһын ауыл тыныслығына, урмандарҙың саф һауаһына, ҡоштар тауышына алмаштырам, тип уйлағандыр. ..

Эйе, әҙәм балаһы ғүмер баҡый йән тыныслығы рәхәте хаҡында пландар ҡора. Мәктәпкә барғас, ата-әсә йортонан айырылғас, эшләй башлағас, ул ошо тойғоға ғына сорналып йәшәр кеүек. Шунан ул донъя хозурлығына ишле булғас, машина, өй һатып алғас, башҡа матди байлыҡты ҡулға төшөргәс өлгәшергә өмөт итә. Быларынан да күңел тыныслығы, йән һәм тән рәхәтлеге ала алмағас, бала, ейән-ейәнсәрҙәрҙе бағыуҙан һиллек киләсәк, тип, ҡартлыҡ йылдарын көтә башлай. Ошо теләгенә өлгәшһә лә, донъяның мөмкин булған бар матди байлығын ҡулына төшөрһә лә, ул ҡәнәғәтләнеү ала алмай. Һынылыш осоро тип көткән егерме, утыҙ, илле, алтмыш йәше лә, айырым ваҡиғалар ҙа, ҡәҙимге көн кеүек, һиҙҙермәйенсә генә үтеп китә...

Рәхәтлек Аллаһы Тәғәлә тарафынан яратылған илаһи һәм ләззәтле бер тойғо ул. Раббыбыҙ уны итәғәтле, иманлы ҡолдарына йәннәттә бүләк ителәсәк бер тойғоларҙан иткән. Ләкин кеше был донъяла уҡ йәннәт көҫәй. Донъя ҡыйынлыҡтары бөтөп, бер нәмәгә борсолмайынса, бер нимә хаҡында ла уйланмайынса, диңгеҙ буйында ҡояш аҫтында ҡыҙынып ятырға теләй (Был бер миҫал ғына, ысынында, һәр кемдең рәхәтлек хаҡында күҙаллауы төрлө). Ләкин нәфсе ҡашығының төпһөҙ, ә үҙе тапҡан донъя "бүләктәре" фани булыуы сәбәпле, ошо хозурлыҡҡа өлгәшә алмай. Сираттағы һәр хыялына өлгәшкән һайын, уның менән оҙаҡ ләззәтләнеп тормаҫтан, икенсеһенә атлыға башлай. Һәр өлгәшкәндән һуң тормошо ла бер аҙға ғына еңеләйгән кеүек тойола ла, яҙмыш яңы һынауҙар, яңы бурыстарын өйөп ҡуя алдына. Кемдәрҙер быға әҙер булмайынса, оло депрессияға бирелә...

...Бер бик бай әҙәм үҙе кеүек үк бай дуҫына ҡунаҡҡа килә. Дуҫының биш йондоҙло ҡунаҡханаһында айырым бүлмә алып, ял итергә ниәтләй. Бер аҙҙан номерға аш килтергән швейцар ҡан тамырҙарын ҡырҡҡан олигархҡа юлыға. Был турала хәбәр алған ҡунаҡхана хужаһы дуҫы янына ашыға. Йән бирергә ятҡан мәлғүндән "Ни өсөн?" тип кенә һорап өлгөрә. Үлем алҡымына етеп килгән иптәшенең һуңғы һүҙҙәре шул була: "Был донъяла мин татып ҡарамаған бер нәмә лә ҡалманы, әммә уларҙың береһе лә мине ҡәнәғәтләндермәне. Бары үлемде генә татып ҡараманым..."

Кеше пландар төҙөй, хыялдар ҡора. Иң күбендә һигеҙ-туғыҙ тиҫтә йыл менән иҫәпләнгән ҡыҫҡа ғүмерендә мәңгелек хозурлыҡ эҙләй. Төндә ҡалҡасаҡ диңгеҙҙең хәҡиҡәт булыуын белә тороп, мәңгелеккә тип, яр буйында ҡомдан бина эшләгән диуана кеүек ҡылана. Киләсәктә фани донъя рәхәтлектәре вәғәҙә иткән өгөтләүҙәргә эйәреп (бөгөнгө көндә шуларҙың береһе - кредит), үҙендә тынысһыҙлыҡҡа атма, тулы тормош менән йәшә, һәр көнөң менән ҡыуан, ләкин үҙеңде матди донъя ҡоло итмә, кеше, тип кенә әйтке килгәйне.

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# КҮҢЕЛ ТЫНЫСЛЫҒЫ БУЛМАҺА...

## байлыҡ та шәйләнмәй

**Байрам алды көндәре - һәр кем өсөн күңелле мәшәҡәттәр осоро. Яҡындарға бүләк әҙерләү, табынға - һый, ҡунаҡтарға күстәнәс алыу кеүек хәстәр менән йүгергеләгән ваҡыт. Сиратта тороу күптән онотолһа ла, халыҡ артыҡ ығы-зығыһыҙ ғына ҡулындағы һатып алынасаҡ әйберҙәрҙең исемлеген барлай.**

Шул саҡ сираттағыларҙың иғтибарын йәлеп итеп, ишекте шар асып, йылҡылдап торған ҡара төлкө тиреһенән тегелгән тун кейгән сибәр ханым килеп инде. Сираттың оҙонлоғон күреп, кире сығырға уҡталғайны, мине күреп, туҡталды. Күптәнге таныштарбыҙ беҙ. Тормош иптәше менән үҙ эшен асып, тиҙ арала алып-һатыу эшенең яйына төшөнөп, киң ҡолас йәйеп эшләне лә китте юғары белемле педагог. Ең һыҙғанып, йәйрәп эшләргә бәләкәйерәк булғанмылыр ҡалабыҙ, иллә-мәгәр бер нисә йыл элек Стәрлетамаҡҡа күскәйнеләр. Әле әсәһен күрергә, байрам менән ҡотларға килеүе икән.

Тәүҙә ул бизнес өлкәһендәге уңыш-ҡаҙаныштары менән уртаҡлашты. Эшһөйәр, әүҙем, егәрле кешенең эше ҡайҙа ла алға бара инде: бер нисә сауҙа нөктәһе асҡан, тиҫтәнән ашыу кешегә эш урыны булдырған.

- Эшкә тик үҙебеҙҙең милләтәштәрҙе генә алдым. Улар ышаныслы. Алдашыу, мутлашыуҙы белмәйҙәр, - тине ул.

Аҡса кешене боҙа, тиһәләр ҙә, танышымдың телһөйәр, илһөйәр булып ҡалыуы һоҡландырҙы. Баласағаһы имен, хәләле лә эшендә лә, өйөндә лә ярҙам итергә ашҡынып тора. Бер һүҙ менән әйткәндә, бөтәһе лә ал да гөл! Шулай ҙа бизнес-ледиҙың күңелен ниҙер өйкәгән кеүек, үҙен тынысһыҙ тота, һөйләгән һүҙе лә ашыҡ-бошоҡ...

- Әсәйегеҙ янында булаһығыҙҙыр әле? - тим магазиндан сыҡҡан ыңғайы.

- Дөрөҫөн әйткәндә, бер, күп тигәндә ике сәғәткә генә килдем. Бынан бер нисә йыл элек йортҡа бурҙар төшкәйне. Шунан ҡаушап ҡалдым шикелле. Ҡот ҡойҙормайынса булмаҫ, ахырыһы, - тип шаяртырға тырышты ул, әммә ысынтылап хафаланғаны асыҡ күренә. - Әсәйҙе генә түгел, ирҙе лә, балаларҙы ла күргән юҡ хәҙер. Һәр беребеҙ төрлө ерҙә сабабыҙ ҙа сабабыҙ. Шөкөр, теләгәнем бөтәһе лә алдыма килде: диңгеҙҙә лә ял иттем, сит илдә лә булдым, ике ҡатлы йортом да бар. Тик күңелгә нимәлер етмәй барыбер. Ҡартаям, ахыры, һуңғы ваҡытта йәшәү мәғәнәһе, тормош асылы тураһында уйға биреләм дә китәм...

Кинәт кенә урыҫ әҙибе Лев Толстойҙың "Ильяс"әҫәре иҫкә төштө. Бизнес-ледиҙың ваҡыты самалы булыуға ҡарамаҫтан, был хаҡта уның да хәтеренә төшөрөргә маташтым:

- Хәтерендәме шул әҫәр? Ҡасандыр етеш, мул тормошта йәшәгән герой ғүмер ҡояшы офоҡҡа яҡынлашҡан мәлдә байлығы юҡҡа сығып, башын ялсылыҡҡа һала һәм шул саҡта ғына ысын бәхеттең ни икәнен татый. Был бәхетте хикәйә геройы Ильяс һәм уның ҡатыны бына нимә тип аңлата: "Беҙ бай инек, әммә тынғылыҡ белмәнек. Һөйләшергә лә, намаҙ уҡырға ла, йән тураһында уйланырға ла ваҡытыбыҙ булманы. Берәй нәмәбеҙ юҡҡа сығып ҡуймаһын, тип, йоҡо белмәнек, шик-шөбһәгә төшөп, гонаһлы булдыҡ. Ә хәҙер һөйләшергә лә, йән тураһында уйланырға ла, ғибәҙәт ҡылырға ла ваҡыт бар..."

...Бәхет төшөнсәһе тураһындағы һуңғы һүҙҙәремде танышым иштеме-юҡмы, һаубуллашыуын белдереп, мине ҡосаҡланы ла, ышаныслы аҙымдар менән машинаһына ыңғайланы...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

*Әлегә миңә ниндәй генә юғары вазифа биләмәһен, маҡтау йоғонтоһона ҡарағанда тәнҡит уты аҫтында яҡшыраҡ эшләгән һәм нығыраҡ тырышлыҡ һалған кешене осратырға тура килгәне юҡ.*
*Чарлз Шваб, сәнәғәтсе.*

**Харизма: беренсе тәьҫорат барыһын да хәл итеүе мөмкин.**

Харизманы күптәр билдәләү мөмкин булмаған ниндәйҙер бер мистик нәмә итеп, ул кешегә йә тыуыштан бирелә, йә бирелмәй, тип күҙаллай. Әммә был дөрөҫ түгел. Харизма, ябайлаштырып әйткәндә - кешеләрҙе үҙеңә ылыҡтырыу ул.

**Башҡаларҙы үҙегеҙгә ылыҡтырыусы кеше булыу өсөн:** беренсенән, тормошто ратығыҙ. Кешеләр тормошто ратҡан лидерҙы барыбер яҡын күрә. Ысынлап та, һеҙҙең менән үҙенең буш ваҡытын үткәрергә теләүселәр хаҡында уйлағыҙ әле. Уларҙы нисек итеп һүрәтләр инегеҙ? Гел һөйләнеп, ҡәнәғәтһеҙлек белдереп йөрөүселәр типме? Шәфҡәтһеҙ һәм депрессия торошонан сыға алмаусылар типме? Әлбиттә, юҡ. Һеҙҙең фавориттарығыҙ зарланмай, улар ҡыуана. Улар тормошҡа дәрт, илһам менән ҡарай. Әгәр һеҙ кешеләрҙе ылыҡтырырға теләһәгеҙ, үҙегеҙ кем менән аралашырға ратаһығыҙ, шуларға оҡшарға тырышырға тейешһегеҙ. XVIII быуатта билдәле вәғәзсе Джон Уэсли: "Үҙегеҙҙе яндырыу өсөн усаҡ өҫтөнә менгәндә, халыҡ һеҙҙең нисек яныуығыҙҙы ҡарарға ҙур теләк менән киләсәк", - тигәндә, быны бик яҡшы аңлаған.

**Икенсенән, һәр кемгә бишле ҡуйығыҙ.** Кешеләр өсөн нимәлер эшләү һәм уларҙы ылыҡтырыу өсөн эшләй алған нәмәләрҙең береһе - уларҙан бары тик яҡшы ғәмәл көтөү ул. Мин быны һәр кемгә бишле ҡуя белеү, тием. Ул беҙҙе уратып алыусыларға үҙҙәрен юғары баһалау мөмкинлеге бирә һәм шул уҡ ваҡытта һеҙгә лә ярҙам итә. Жак Визель һүҙҙәре буйынса, "Үҙ тырышлыҡтары һөҙөмтәһендә миллионер булған 100 кешенең тормошон ентекле өйрәнеү уларҙың бер генә уртаҡ оҡшашлығы булыуын күрһәтте. Барлыҡ ошо уңыш ҡаҙаныусы ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр кешеләрҙең бары тик яҡшы яҡтарын ғына күрә белеүселәр".

